ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

14-20 март (буранай) 2025

№10 (1154)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Иң әүҙем өс төбәк иҫәбендәбеҙ



5

Участкаң ташландыҡ хәлдәме?



6

Тарихыбыҙ тәрән,

уны башҡалар ҙа белһен...



8-9

Пифагор теоремаһы:

нисек бәхетле булырға?



11


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән апрелгә тиклем, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ?

### Һуңғы йылдарҙа райондарҙа ҡышҡы милли спорт саралары үткәреү бик популяр була бара. Һеҙҙең уйығыҙса, бындай сараларҙың әһәмиәте нимәлә?

***Ирек ШӘМИҒОЛОВ, Бөрйән районы хакимиәтенең социаль сәйәсәт, йәштәр эштәре һәм спорт бүлеге начальнигы:*** Бөрйәндә быйыл 56-сы тапҡыр Исмәғил Ғәбитов призына ҡышҡы ат ярыштары үтте. Был милли спорт сараһына районыбыҙҙа 1969 йылда уҡ ул ваҡытта "Бөрйән" совхозында директор булып эшләгән Бөрйән районының Почетлы гражданы Исмәғил Ғәбитов тарафынан башланғыс һалына. Артабан яҡташыбыҙ республикала юғары вазифалар биләй, төбәк үҫешенә ҙур өлөш индерә.

Һуңғы йылдарҙа ҡышҡы ат ярыштары "Урал батырҙың Ҡышҡы уйындары" менән бергә үткәрелә, шуға ла уның программаһы бик бай. Һыбайлылар өсөн һәм саналарҙа 6 төрлө бәйге, ат өҫтөндә "Ылаҡ", "Ауҙарыш", "Тәңкә алыу" уйындары, ат яратыу - былар милли спорт байрамының иң сағыу саралары. Унан тыш, 5 этаптан торған "Мәргән уҡсы" турниры еңеүселәре абсолют чемпион исеме өсөн көрәште, спортсылар суҡмар ырғытыу, арҡан тартыу ярыштарында ла көс һынашты. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары аттарҙы сергетыш менән биҙәү буйынса конкурс ойошторҙо. Район ойошмалары һәм ауыл хакимиәттәре командалары араһында Исмәғил Ғәбитов исемендәге күсмә Кубок уйнатылды. Әйткәндәй, уны Әтек ауылы командаһы яулаНЫ.

Күҙәмбәт яланындағы байрам, йылдағыса, ат парадынан башланып китте: һыбайлыларҙы сана егелгән аттар алмаштырҙы. Район сараһы булһа ла, ғәҙәттә, бәйгеләрҙә ҡатнашыусылар ситтән дә күпләп килә. Быйыл, мәҫәлән, Белорет, Баймаҡ, Әбйәлил, Ейәнсура, Ғафури, Күгәрсен райондарынан, Өфө, Сибай ҡалаларынан ҡатнашыусылар булды. Традицион уҡ атыу буйынса ярыштарҙа 60 спортсы ҡатнашты. Иң йәшенә - 10, ә иң олоһона 75 йәш ине. Беҙҙең районда уҡсылар хәрәкәте яҡшы үҫешкән, чемпион исемдәре йөрөтөүсе Бөрйән егеттәре бар.

Бындай сараларҙың әһәмиәтенә килгәндә, ул баһалап бөткөһөҙ. Борон-борондан башҡорт аттан башҡа йәшәмәгән. Бөрйән халҡы иһә аттарҙы яратыуы, уға ҡарата айырыуса иғтибарлы булыуы менән айырылып тора, тип уйлайым. Шүлгән мәмерйәһендәге тәүтормош кешеһенең ат һүрәте, Йылҡысыҡҡан күленән аттар сығыуы тураһында риүәйәт беҙҙең ерлеккә бәйле бит. Төпкөл һаналған районыбыҙҙа элек йөк ташыу өсөн аттан башҡа транспорт булмаған. Шуға атай-олатайҙарыбыҙҙың тормошон атһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Ошо ҡарашты, атҡа булған һөйөүҙе йәш быуынға еткереү яғынан да ҡышҡы ат ярыштары кеүек саралар бик тә мөһим. Икенсе яҡтан, халҡыбыҙ йолаларын, уның йылҡысылыҡҡа бәйле мәҙәниәтен балаларыбыҙ күрә, фиғеленә һеңдерә. Был йәһәттән уның тәрбиәүи әһәмиәте бик ҙур. Ә "Урал батырҙың Ҡышҡы уйындары" - районыбыҙҙың визит карточкаһы кимәленә күтәрелгән һәм республиканың туристик календарында урын алған мөһим ваҡиға ул.

## БАЛАЛАРЫБЫҘ

# АТАЙ-ӘСӘЙ ҒОРУРЛЫҒЫ

**Ейәнсура районының Иҫәнғол ауылынан Әмир Мәһәҙиев исемле малай йыйған аҡсаһын Махсус хәрби операция яугирҙарына тапшырған. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә һигеҙ йәшлек яҡташыбыҙҙың изге ғәмәле тураһында яҙа.**



Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, Әмир планшет алыу өсөн аҡса йыйған. Ләкин йәш патриот аҡсаның фронтҡа нығыраҡ кәрәк икәнен аңлай. "Уларға был аҡса кәрәгерәк, сөнки кемдәрҙеңдер атайҙары унда бит", - тип иҫәпләй Әмир.

Әмирҙең ошо аҙымы тураһында әсәһе социаль селтәрҙә яҙып сыҡты, тине республика етәксеһе. Был яҙманан һуң дуҫтары һәм миһырбанлылар ярҙамында 19 мең һумға яҡын аҡса йыйып, ике рация һатып алынған.

"Был миңә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында республикабыҙ комсомолдары, пионерҙары, уҡыусыларының самолеттар һәм танктар төҙөүгә аҡса йыйыуҙарын иҫкә төшөрҙө. Әмиргә өлгө булырҙай кеше бар. Уның атаһы - Эске эштәр министрлығы офицеры. Олатаһы - отставкалағы подполковник, хәрби хәрәкәттәр ветераны. Ул да беҙҙең еңеүгә үҙ өлөшөн индергән. Ике антидрон һатып алып, яугирҙарға алып барып тапшырған. Әмиргә, уның дуҫтарына һәм, әлбиттә, ата-әсәһенә шундай ул тәрбиәләгәндәре өсөн рәхмәт белдерәм. Егеттәребеҙгә ысын күңелдән ярҙам иткән яҡташтарыбыҙға рәхмәт", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

**Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ ҡалаһынан депутат Юрий Орда Ейәнсура районында булып, Әмир Мәһәҙиевҡа "Монах" исемле Махсус хәрби операция яугирынан бүләк - планшет тапшыра. Әйтеүҙәренсә, был яугир Әмирҙең изге эше тураһында ишетеп, һоҡлана һәм видеобәйләнеш аша бөтә яугирҙар исеменән малайға рәхмәтен белдерә.**

12+

**✓ Бер ни тиклем сик һаҡлаһаң, ара тотһаң, башҡа халыҡтар бына тигән ул. Улар менән дуҫлашабыҙ, бергә эшләйбеҙ, күрше булып йәшәйбеҙ. Барыһы ла яҡшы, тик ғаилә ҡорғанда түгел. Сөнки өй эсендә сиктәр юҡ.**



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**Ғүмер кискән һайын, күпте күрәһең, күпте кисерәһең. Бөтә кешенең дә яҙмышы бер төрлө уңышлы, йәки бер төрлө әсе булмай. Башлыса үҙебеҙ һайлайбыҙ тормош юлын. Кеше йә күнеп, йә көрәшеп йәшәй, күп ваҡыт ҡылған эшен, яһаған аҙымын дөрөҫ тип таба. Йәшлектә бер кем дә, мин дөрөҫ эшләйемме икән, тигән уйға батып ултырмай, ә хистәрен, йөрәк ҡушыуын тыңлап ғәмәл ҡыла. Был тормошта байтаҡ йәшәгән кеше буларaҡ, милләтемдең аҫыл ҡыҙҙарына һәм егеттәренә ошо юҫыҡта әйтер һүҙем бар.**

# ЙӘШТӘРГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

Беренсенән, күңелгә яҡҡан һөнәр һайларға, уға эйә булырға тырышырға кәрәк иң элек. Яратҡан һөнәр - үҙе бәхет. Атай-әсәйҙәрегеҙ һеҙ белемле булһын өсөн күп көс һала, матур тәрбиә бирергә тырыша, туған-ырыуығыҙ менән яҡшы мөнәсәбәт һаҡлап, уларға хөрмәт күрһәтергә өйрәтә.Төплө, матур ғаилә ҡорған туғандарығыҙ ҙа һеҙгә үрнәк булып тора. Атай-әсәйегеҙ, туғандарығыҙ тел ярҙамы менән дә һеҙҙе дөрөҫ юлға өндәй. Ярҙам - ул матди мохтажлыҡты ҡәнәғәтләндереү генә түгел, ә күңел торошон, кешенең рухи байлығын тулыландырыу, икеләнгән саҡтарында кәңәш биреү кеүек күренмәгән, күңел менән генә һиҙелерлек аҙымдарҙан тора. Йылы ҡараш, йылы һүҙ, арҡандан һөйөп алыуҙары - һиңә булған туғанлыҡ хисен белдереү ул.

Икенсенән, артабанғы һүҙем ҡатнаш ғаиләләр тураһында булыр. Һиҙеп торам, күптәргә был тема оҡшамай, сөнки аңыбыҙға, ғаилә ҡороу өсөн бер-береңде яратыу ҙа етә, тигән ялған ҡараш ныҡ һеңгән.

Әммә йәшлек аңһыҙ аҙымдарға, осраҡлы енси яҡынлыҡҡа юл ҡуя. Бөгөнгө киң мәғлүмәт саралары, кинофильмдар бер сер ҡалдырмай был юҫыҡта, урыҫса әйтһәк, "вседозволенность"ты алға һөрә, уны тәбиғи тип бара. Шуға ла сараһыҙҙан өйләнешкән йәш ғаиләләр барлыҡҡа килә, әммә ундай парҙар оҙаҡламай тарҡала. Сөнки үҙаллы тормош йөгөн тартырға әҙер булмай сығалар.

Йәш ғаилә бит яңы бөрөләнгән үҫенте кеүек, һаҡлауға, яҡлауға, ҡурсалауға мохтаж. Төрлө ҡапма-ҡаршылыҡтар, урынһыҙ әйтелгән һүҙ, үҫкән мөхиттең, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең төрлөлөгө, дин, тел айырмаһы ла йәштәргә яраҡлашып китеү өсөн кәртә булып тора. Эйе, әгәр мөхәббәтегеҙ барыһына ла ҡаршы торорҙай көслө икән, һеҙгә бер нәмә лә кәртә була алмай. Һәр кем күрәсәген күрә, әммә ҡатнаш никахта нимә көткәнен алдан белеү яҡшыраҡ.

Үҙ ғүмеремдә төрлө яҙмышлы кешеләрҙе күрҙем. Сит милләт, сит мөхит, сит йолалар, дин, тел айырмаһы, тарих ҡапма-ҡаршылығы арҡаһында күҙ алдымда күпме айырылышыу булды, яҙмыштар селпәрәмә килде. Ғүмер буйы ҡатын-ҡыҙҙар һаулығын һаҡлау өлкәһендә эшләү тәжрибәмә таянып, үҙемде өлкән йәштәге милләт инәһе итеп тойғанға яҙам быларҙы.

Бер ни тиклем сик һаҡлаһаң, ара тотһаң, башҡа халыҡтар бына тигән ул. Улар менән дуҫлашабыҙ, бергә эшләйбеҙ, күрше булып йәшәйбеҙ. Барыһы ла яҡшы, тик ғаилә ҡорғанда түгел. Сөнки өй эсендә сиктәр юҡ. Йәш ир йәки ҡатын партнерының тормошона бөтөнләйе менән инә, уның ата-әсәһен, туғантыумасаһын нисек бар, шулай ҡабул итә, ул яратҡанды яратырға, ул ынтылғанға ынтылырға теләй. Былар ҡан ҡәрҙәштәр өсөн бер ҡыйынлыҡ та тыуҙырмай. Ә һеҙ сит мөхиттә, сит телде нисек яратырһығыҙ, уларҙың быуаттар буйы һаҡланған беҙҙең халыҡҡа булған ҡарашын нисек ҡабул итерһегеҙ? Беҙ, башҡорттар, ябайбыҙ, күңелебеҙ киң (ныҡ толерантлыбыҙ). Башҡаларға яраҡлашырға, ярарға тырышып торһаҡ та, күп нәмәне күңел барыбер ҡабул итмәй. Һөҙөмтәлә ғаиләлә ҡаршылыҡтар үҫә, аңлашылмаусанлыҡ артҡандан-арта бара. Белемле, матур холоҡло башҡорт ирҙәренең икенсе ҡәүем ҡыҙына өйләнеп әсенгәненә күп тапҡырҙар шаһит булғаным бар.

Шуны ла белеү кәрәк: һеҙҙең балаларығыҙ башҡа милләтте тулыландырасаҡ. Әсә теле - туған тел. Әлбиттә, башҡа милләттән булған әсә лә балаларының уның телендә һөйләшеүен теләйәсәк, башҡорт теле, мәҙәниәте улар өсөн ят буласаҡ. Балаларығыҙҙың насар ғәҙәттәре булһа, "атаһына оҡшап", тип кәмһетерҙәр, ә яҡшы яҡтары гел уларҙыҡы булыр...



Башҡа милләт ҡыҙы йә егете менән дуҫлашып йөрөй икәнһегеҙ, улар менән мөнәсәбәтегеҙҙе өҙөгөҙ, тип өндәмәйем. Килен йәки кейәү булырға яҙһа, атайәсәйҙәрегеҙ һеҙ һайлағанды яратып ҡабул итер. Һеҙ яратҡас, улар ҙа яратыр. Әммә атай-әсәйегеҙ, яҡын туғандарығыҙ һеҙгә ҡыҙғанып, йәлләп ҡараясаҡ. Ғаилә - ул бәхәс яланы түгел, ә бәхет сығанағы. Ашыҡмағыҙ, яҡындарығыҙ менән кәңәшләшегеҙ, уларҙың ҡарашын, фекерҙәрен белегеҙ, улымдың йә ҡыҙымдың бәхете булмай инде, тиеп, ҡайғыға ҡалмаһын яҡындарығыҙ.

Егеттәр һәм ҡыҙҙар, тормошоғоҙҙо икеләтә ауыр итергә ашыҡмағыҙ, бәлки, һеҙҙең үҙ йәрегеҙ, тик һеҙҙең өсөн генә тыуған ҡыҙ йә егет үҙ арағыҙҙа йөрөйҙөр. Бәлки, ул да һеҙҙе эҙләйҙер. Һеҙ ниндәй булһағыҙ ҙа, беҙҙәнһегеҙ, сөнки һеҙҙе беҙ үҫтерәбеҙ, тәрбиә бирәбеҙ, күп нәмәне беҙ ҡорған мөхиттән алаһығыҙ. Бәлки, үҫкәндә, атай-әсәйҙәрҙән, өлкән инәй-олатайҙарҙан һеҙгә еткереп етмәгән аҡыл, әйтеп бөтмәгән фекер ҙә булғандыр, бәлки, иғтибар ҙа етеңкерәмәгәндер. Ғәйеп тик һеҙҙә генә түгел, тип әйтмәксемен.

Бөгөн илебеҙ ауыр юғалтыуҙар кисерә. Ил именлеге өсөн сит ерҙәрҙә көрәш бара. Күп милләттәштәребеҙ ошо Махсус хәрби операцияла ҡан ҡоя. Илебеҙҙең киләсәге һеҙҙең ҡулдарҙа, егеттәр һәм ҡыҙҙар. Булмышыбыҙға ҡайтайыҡ, башҡорт ғаиләләрен арттырайыҡ, милләтебеҙҙе юғалтмайыҡ!

**Фәрҙиә ЮНЫСОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре.**
**Сибай ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Һуңғы йылдарҙа райондарҙа ҡышҡы милли спорт саралары үткәреү бик популяр була бара. Һеҙҙең уйығыҙса, бындай сараларҙың әһәмиәте нимәлә?

***Рөстәм МИҺРАНОВ, Өфө юридик институтының өлкән уҡытыусыһы:*** Бындай саралар, һис шикһеҙ, ауыл мөхитенә ыңғай йоғонто яһай, халыҡты берләштерә, аралашыу, көрәшеү майҙансығы булып тора.

Белорет районының Манышты ауылында, мәҫәлән, быйыл өсөнсө тапҡыр Бигарыҫлан Солтанов исемендәге башҡорт биатлоны буйынса республика бәйгеһе уҙҙы. Триатлон, тип тә атайбыҙ беҙ уны. Сөнки дистанцияла бәйгеселәр өс һынау аша үтә. Биатлон шарттары буйынса, ҡатнашыусылар, 1800 метр араны һунар саңғыһында таяҡһыҙ үтеп, уҡтан һәм пневматик мылтыҡтан атып, мәргәнлеккә һөңгө ташлап ярыша. Стартҡа быйыл 95 кеше баҫты. Үткән йылдарҙа 70 һәм 78 кеше ҡатнашҡайны. Ир-егеттәр, 18 йәшкә тиклемге үҫмерҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ҡыҙ балалар айырым төркөмдәрҙә көс һынашты. Иң йәш ҡатнашыусыға - 7, ә иң өлкәненә 72 йәш ине. Йәғни бөтә быуын вәкилдәрен йыйҙы сара. Милли спорт ярышын ҡарарға ла халыҡ күп килде. Махсус эшләнгән сәхнәнән шиғырҙар, йырҙар яңғыраны, ҡулға-ҡул тотошоп күмәкләшеп бейеү дәрт өҫтәне. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары, ағинәйҙәр бөтә ҡунаҡтарҙы самауыр сәйе, милли ризыҡ менән һыйланы.

Башҡорт биатлоны һунарсылар абруйын күтәреү, ауылда айыҡ тормош алып барыуҙы пропагандалау, халыҡты берләштереү маҡсаттарын тотоп ойошторолдо. Ә сараның атамаһына килгәндә инде, уның мәғәнәһе ҡуйылған маҡсаттарға туранан-тура һуҡтыра. Башҡорт рәссам сәнғәтенә нигеҙ һалыусы Ҡасим Дәүләткилдиевтың "Башҡорт һунарсыһы" тигән билдәле картинаһы бар. Унда Манышты һунарсыһы Бигарыҫлан Солтанов һынландырылған. Рәссам уны 1928 йылда Белорет районына килгән сағында төшөргән. Картинаның икенсе яғына ул "Бигарыҫлан Солтанов, һунарсы, 30 йәш, 20 айыу алған, 16 бүре тотҡан. Партиялы, инвалид. Инвалидлығын һунарҙа алған. Эте Бурзик", тигән белешмә яҙып ҡуйған.

Тәүге тапҡыр Бигарыҫлан Солтанов исемендәге башҡорт биатлоны ошо Маныштынан сыҡҡан яҡташтар, республика "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһы тарафынан ғына ойошторолғайны. Был юлы иһә ул милли һәм этник спорт төрҙәре буйынса республика турниры кимәлендә үтте, ойоштороусылары булып республиканың Спорт министрлығы, Белорет районы хакимиәте, республика "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһы сығыш яһаны. Йыл да сараға Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров үҙе килә һәм бүләктәр тапшыра. Быйыл бәйге Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугирҙарға бағышланды.

Беҙҙең Маныштыла эшсән, тырыш кешеләр йәшәй. Күптәр айыҡ тормош алып бара, заман менән тигеҙ атларға, етеш донъя көтөргә ынтылалар. Тимер юлында, "Көньяҡ Урал" ҡурсаулығында, Инйәрҙә эшләйҙәр, вахта менән Себер тарафтарына йөрөп мал табалар. Бигарыҫлан Солтановтың образы яҡташтарға үрнәк булып тора, быуындар сылбырын бәйләй, үткәндәргә, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу уята. Уның исемендәге башҡорт биатлоны кеүек саралар халыҡҡа, бигерәк тә йәштәргә рухи көс, дәрт бирә, уларҙы берләштерә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең указы менән Сәнәғәтте үҫтереү советын булдырҙы. Кәңәшмә органы федераль, төбәк һәм муниципаль власть органдарының үҙ-ара һәм предприятиелар менән һөҙөмтәле бәйләнешен тәьмин итергә тейеш, тиелә документта. Советҡа сәнәғәт, сауҙа министрлыҡтары, шул иҫәптән федераль министрлыҡ вәкилдәре; бизнесҡа ярҙам күрһәтеү өсөн яуаплы структура етәкселәре; Башстат; БСК, БГК, Өфө моторҙар эшләү берекмәһе, Инман, "НефАЗ" кеүек компанияларҙың етәкселәре, "Газпром"дың төбәк компаниялары һәм башҡалар инә.

✓Башҡортостанда бушлай һөт ризыҡтары менән тәьмин ителеүселәрҙең исемлеге киңәйтелде. Хәҙер был ярҙам сараһы Махсус операция яугирҙарының өс йәшкә тиклемге балаларына ла ҡағыла. Тейешле үҙгәрештәр Башҡортостандың хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Бының өсөн Украина, Луганск, Донецк Халыҡ Республикаһы, Запорожье һәм Херсон биләмәләрендә МХО-ла ҡатнашыуҙы раҫлаған белешмә тапшырырға кәрәк.

✓Алыҫ араға йөрөгән поездарға билет һатып алғанда ата-әсәләр балаларына сумманың яртыһын экономиялай ала: Рәсәй Хөкүмәте ҡарарында 50 процент ташлама билдәләнгән. Плацкартҡа, дөйөм вагондарға һәм 2-се, 3-сө класлы вагондарға билеттар алған осраҡта аҡсаны экономияларға мөмкин. Ташлама тиҙ йөрөшлө поездарға ҡағылмай. Хәбәр ителеүенсә, балалар өсөн авиабилеттарға 50 процент ташлама тураһында бойороҡ үҙ көсөнә инде.

✓Дәүләт Думаһы бәлиғ булмағандарға энергетиктар һатҡан өсөн административ яуаплылыҡ билдәләгән закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. 1 марттан Рәсәйҙә уларҙы һатыу тыйылды, тип хәбәр ителгәйне. Бының өсөн ҙур штрафтар билдәләргә тәҡдим ителә. Әйтәйек, ул ойошмалар өсөн - 300-500 мең, вазифалы кешеләр өсөн - 100-200 мең, ә граждандар өсөн 30-50 мең һум тәшкил итергә тейеш. Парламентарийҙарҙы йәштәр араһында энергетик эсемлектәрҙең популяр булыуы борсой. Табиптар ҙа уларҙың зыянлы икәнен раҫлай, энергетиктар гипертония, йөрәктең ишемия ауырыуы, диабет һәм башҡа сирҙәргә килтереүе ихтимал.

✓Рәсәй Хөкүмәте социаль догазификация өсөн өҫтәмә рәүештә 1 миллиард һум йүнәлтә. Ҡул ҡуйылған бойороҡҡа ярашлы, аҡса федераль финанслау талап ителгән 55 төбәккә бүленә. Башҡортостан 47,712 миллион һум алырға тейеш. Аҡса программала ҡатнашҡан льготалыларға ҡорамалдар һатып алыу һәм газ селтәрҙәренә тоташтырыу өсөн кәмендә 100 мең һум күләмдә субсидия бүлеү өсөн тәғәйенләнә. Ярҙамға күп балалы ата-әсәләр, аҙ килемле граждандар, МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары, I төркөм инвалидтары, шулай уҡ инвалид балаһы булған граждандар, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары иҫәп тота ала.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...




***Азат ШӘРИПОВ, Баймаҡ районы хакимиәте башлығының ауыл хужалығы буйынса беренсе урынбаҫары:*** Темәс ауылында март башында үткән ат сабыштары Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына, 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарына, шулай уҡ Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү йылына арналды. Эйе, районыбыҙҙа ҡышҡы милли спорт саралары бик популяр. Ат бәйгеләре Икенсе һәм Беренсе Этҡол, Ярат, Иҫке Сибай ауылдарында, Баймаҡтың үҙендә һәр ҡыш һайын ойоштторола. Программаға йыш ҡына төрлө конкурстар һәм ярыштар ҙа индерелә. Беҙҙә "Ылаҡ", "Ауҙарыш", "Тай-тулаҡ" уйындары киң тарала бара, "Мәргән уҡсылар"ыбыҙ әүҙем.

Быйыл Иҫке Сибайҙа бер юлы башҡорт тоҡомло аттар йәрминкәһе - "Ат баҙары" ла үткәрҙек. Баймаҡтар ғына түгел, яҡын-тирәләге райондар ҙа башҡорт тоҡомло аттарҙы: айғырҙарҙы, иткә һимертелгән йылҡы малын, спорт һәм эш аттарын күргәҙмәгә һәм һатыуға алып килде. Ә һатып алыусылар төрлө төбәктәрҙән, шулай уҡ Ҡаҙағстандан да булды. Йыйлап "Ат баҙары" йәрминкәһе ойоштороу ҙа республикаға таралып китер тигән өмөттәбеҙ.

2022 йылдан районыбыҙҙа республика Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән "Башҡорт аты" фестивале үтә. Ул хәҙер Баймаҡтың брендына әүерелде. Төрлө йылдарҙа фестивалгә Ҡалмыҡстан Республикаһы Башлығы Бату Хасиков, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан вәкилдәре килде. Былтыр 500 һыбайлынан торған Башҡортостан тарихында иң ҙур атлы парад ойошторҙоҡ. "Башҡорт аты"ның төп маҡсаты - башҡорт атын һаҡлау, өйрәнеү, йылҡысылыҡты, ҡымыҙ эшләүҙе һәм ҡымыҙ менән дауалауҙы, йылҡысылыҡҡа бәйле кәсепселекте үҫтереү. Үрҙә атап үтелгән атҡа бәйле һәр сараның маҡсаты ла шуға ҡайтып ҡала.

Әлбиттә, беҙ йәш быуынға атай-олатайҙар кәсебен, йылҡысылыҡҡа бәйле халыҡ йолаларын тапшырырға, уларҙа атҡа ҡарата һөйөү тәрбиәләргә тейешбеҙ. "Йылҡы" һәм "ат" төшөнсәләре бар. Улар нисек һәм нимәһе менән айырыла һуң? Ә "ат ятарыу" нимә була? Хәҙер быны йәштәр түгел, урта быуын да белмәй. "Тай-тулаҡ" бәйгеһен ҡараған кеше ошо һорауҙарға онотолмаҫлыҡ итеп яуап ала. Өс кешенән торған команда өйрәтелмәгән атты ауыҙлыҡлай, уға һыбай менә - йылҡынан ат шулай әүәләнә. Егетлек, көс, таҫыллыҡ талап иткән "Тай-тулаҡ" ярышы иҫ киткес мауыҡтырғыс һәм көсөргәнешле булыуы менән айырылып тора.

Темәстәге ҡышҡы ат сабыштарына әйләнеп ҡайтҡанда инде, уның киң популяр булыуын билдәләп китергә кәрәк. Темәстә йылҡысылыҡ ныҡ үҫешкән. Урындағы халыҡ ата-бабаларының үҙҙәренең аттарында Петр Беренсенең Азов походында, шведтар менән Төньяҡ һуғышында, Германияла ете йыллыҡ һуғышта, 1812 йылдағы Ватан һуғышында, рус-төрөк һуғышында, Граждандар һуғышында һәм, әлбиттә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуы менән ғорурлана. Темәстең Башҡорт автономияһының беренсе баш ҡалаһы булыуын да онотмайыҡ. Унда тарихты, йолаларҙы, милли мәҙәниәтте ихтирам итәләр һәм уларҙы киләһе быуынға еткереү йәһәтенән бик ҙур эш башҡаралар. Милли һәм этник спорт төрҙәренә ингән ҡышҡы ат сабышы - шулар рәтендә.

**Байгилде МОТАЛЛАП яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТОРБА ЭСЕНӘН - ДОШМАН ТЫЛЫНА

**Рәсәй армияһы 10 мартта Курск өлкәһендә киң ҡолас һөжүмгә күсте һәм бындағы иң ҙур тораҡ пункт - Суджаны штурмлай башланы. Һуңғы ике көн эсендә Рәсәй яугирҙары ете тораҡ пунктын азат итеп, Суджа сигендәге шәхси секторҙа алыша.**

Шуныһы ғәжәп итерлек булды: уникаль план буйынса Рәсәй армияһының 800 ирекмән яугиры Суджа районындағы дошман позицияһына эсе буш булған Уренгой - Помары - Ужгород ер аҫты газ үткәргесе аша йәшерен рәүештә көтмәгәндә килеп сығып, украин боевиктарының ҡотон ала. Дөрөҫ, бының өсөн беҙҙең ҡыйыу егеттәргә 1,4 метр диаметрлы газ үткәргес эсенән бөтөн яу кәрәк-яраҡтарын артмаҡлап, атлаған ерҙә - атлап, шыуышҡан ерҙә шыуышып, ике көн буйы 12 - 15 км юл үтергә тура килә. Уның ҡарауы, беҙҙең яугирҙарҙы газ торбаһы дошман дрондары, миналарынан һәм техникаһынан ышаныслы һаҡлай. Метан менән ағыуланып, аҙыҡһыҙ-һыуһыҙ тигәндәй, яугирҙар, ниһайәт, дошман тылына үтеп инә һәм кинәт һөжүм башлай. АиФ-Мәскәү сығанағы хәбәр итеүенсә, Украина Ҡоралллы көстәре подразделениелары юғалып ҡала, обороналары өҙөлә һәм улар үҙ көстәренең ҡайһы бер төркөмдәрен алғы позицияларҙан тылға сығарырға мәжбүр була. Шуға ҡарамаҫтан, ҡалған дошман боевиктары менән Суджа районында һуғыштар дауам итә. Фиҙаҡәр ҡаһарманлыҡ өлгөһө булған был "Торба" операцияһында "Ахмат" - Аида төркөмө, 11-се ВДВ бригадаһы, "Восток", "Ветеран" төркөмдәре, диңгеҙ пехотаһы егеттәре, 106-сы бригада яугирҙары ҡатнашты.

РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, 11 мартҡа ҡарай төндә Украина тарафы Рәсәйгә быйыл быға булмаған күләмдә дрондар "ямғыры" яуҙырҙы. Курскиҙа еңелеү дошмандың һарыуын ҡайнатты, күрәһең: үлер алдынан себен дә әсе ташлай, тиҙәр бит. Рәсәй Һауа һөжүменә ҡаршы оборона саралары шул төн эсендә генә 337 украин пилотһыҙ осоусы аппаратын бәреп төшөрҙө һәм юҡ итте. Шуларҙың 91-е - Мәскәү өлкәһендә, 126-һы - Курск өлкәһе территорияһында, 38-е - Брянск, унауһы Калуга өлкәһендә, былардан тыш, Липецк, Орлов, Воронеж һәм Нижегород өлкәләрендә бәреп төшөрөлдө. Дошмандың аяуһыҙлығы һәм яуыз ниәте шунда ла асыҡ сағыла: улар дрондарҙы торлаҡ йорттар массивына ҡарай йүнәлтә башланы. Емереклектәр, тыныс халыҡ араһынан зыян күреүселәр бар, ике кеше үлгән.

Америка сәйәси күҙәтеүсеһе Джон Миршаймер Duran You Tube каналы эфирында, Украинаға ярҙам буйынса Европа планы АҠШ ҡатнашлығынан тыш барып сыҡмаясаҡ, тип белдерҙе."Европа илдәре Киевҡа аҡсанан тыш тағы ла нимә менәндер ярҙам итә алмау ғына түгел, үҙҙәренең армия составы ниндәй хөрт хәлдә икәнен дә аңлап етмәй, ахырыһы. Франция һәм Германияның Рәсәй менән ярышырға һәләтле армияһы юҡ", - тип ҡәтғи белдерҙе Миршаймер. Әйткәндәй, 9 мартта "Макронды - отставкаға!" тигән плакаттар тотҡан Париж халҡы, Украинаға ҡорал ебәреүҙе һәм унда ҡан ҡойошто туҡтатыуҙы талап итеп, ҡаланың үҙәк урамдарына протест акцияһына сыҡты. Был сәйәси сараны ойоштороусылар белдереүенсә, Евросоюз Украиналағы конфликт утын артабан дөрләтергә маташа. "Европа хәрби блокка әүерелергә тейеш түгел!" тип ҡысҡырҙы протест белдереүселәр. Хәрби блок, тигәндәй, донъяның иң бай кешеһе - билдәле Америка миллиардеры, бизнесмен Илон Маск АҠШ президентының НАТО блогынан сығыу менән янауын хупланы. Сөнки, ти ул, НАТО составындағы Евросоюз илдәре АҠШ-ты банкомат урынына күрә, ә бит улар ҙа дөйөм альянс ҡаҙнаһына, тимәк, үҙҙәренең хәүефһеҙлеге хаҡына, АҠШ кеүек үк, аҡсаны күберәк күсерергә тейеш. Етмәһә, Европа лидерҙары Украинала "туҡтауһыҙ һуғыш" алып барыу яҡлылар. Шуға күрә лә Илон Маск Дональд Трамптың АҠШ-ты НАТО составынан сығарырға янауын хупланы. Ғөмүмән, Трамп командаһына алынған һәм президенттың иң яҡын кәңәшсеһе - АҠШ хөкүмәте һөҙөмтәлелеге департаменты (DOGE) етәксеһе итеп тәғәйенләнгән бизнесмен Илон Маск сәйәсәт һәм дәүләт эштәрендә быға булмаған әүҙемлек күрһәтә. Уның департаменты тарафынан Трамп ихтыяры менән үткән айҙа меңәрләгән дәүләт хеҙмәткәре ҡыҫҡартылды, тип хәбәр итә kommersant.ru. Ләкин Трамп хакимиәтенең башҡа департаменттары һәм министрлыҡтары, профсоюздар һәм демократтар Илон Масктың кадрҙарға ҡарата бындай аяуһыҙлығын законға һыйғыһыҙ тип тапты һәм уға ҡаршы сыҡты. Һөҙөмтәлә дәүләт аппаратын "таҙартыу" бер аҙға әкренәйтелде, ә Трамп Масктың был йәһәттән вәкәләтлеген бер аҙ сикләргә мәжбүр булды. Бынан тыш, ҡаҙна экономиялау маҡсатында АҠШ-тың башҡа илдәргә финанс ярҙамы күпкә кәметелде. Власҡа килгәндән һуң Трамп үҙе Маск департаментына АҠШ-тың дәүләт бюджеты сығымдарын тикшерергә ҡушҡайны һәм шул нигеҙҙә Илон Маск командаһы дәүләт сығымдарын 2 трлн долларға ҡыҫҡартырға иҫәп тота.

Новости Рәсәй агентлығы хәбәренә ҡарағанда, Дональд Трамп, ғөмүмән, коллектив Көнбайыш донъяһын үҙгәртеп ҡорорға иҫәп тота, сөнки ул Украина конфликтының асылда Көнбайыш менән Рәсәй араһындағы көрәш булыуын таный. "Бындай ҡаршылыҡтың өсөнсө донъя һуғышына килтереү хәүефе бар. Ҡайһы саҡ кешеләр ошо хаҡта онотоп ебәрә, ә был уйынсыҡ түгел",- ти АҠШ президенты. Америка сәйәси күҙәтеүсеһе Скотт Риттер белдереүенсә, Рәсәйгә ҡаршы бөтөн булған истерия демократик партияның хөсөтлөгө ул. Бындай мөнәсәбәт Украина менән генә сикләнмәйәсәк, шуға күрә коллектив Көнбайышты ауыҙлыҡларға һәм туҡтатырға кәрәк, ти Риттер.

Һуңғы яңылыҡтарҙан: Сәғүд Ғәрәбстанында АҠШ делегацияһы менән осрашҡандан һуң Киев американдар көсләп таҡҡан шартты ҡабул итергә мәжбүр булды һәм 30 көнгә утты туҡтатырға әҙерлеген белдерҙе. Был ике йөҙлөлөккә ышаныуы ҡыйын, әлбиттә, тип яҙа сәйәси күҙәтеүселәр, сөнки Курск өлкәһендә ҡыйратылыуға дусар ителеп, иртәгәһенә яуыз үс алыу ниәте менән Рәсәйгә, хатта уның төпкөл ҡалаларына аяуһыҙ дрондар һөжүме яуҙырыуы Киев режимының теләһә ҡайһы ваҡыт һәм башына ни килһә, шуны эшләү ихтималлығын күрһәтте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Март айында республика Дәүләт Йыйылышы беренсе уҡыуҙа Башҡортостан Республикаһының Ғаилә кодексына үҙгәрештәр индергән закон проектын ҡарай. Уға ярашлы, Башҡортостанда енесен алмаштырырға рөхсәт ителгән илдәрҙең граждандарына балаларҙы уллыҡҡа-ҡыҙлыҡҡа алыу тыйыла. Был хаҡта республика парламентының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, бындай ҡарар балалар хаҡында хәстәрлек күреү маҡсатында ҡабул ителде. Матур тәрбиә бирер өсөн уларҙың традицион ғаилә ҡиммәттәре менән гармонияла үҫеүе мөһим.

✔ Башҡортостандың Яҙыусылар союзы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы идараһы составына инде. "27 февралдә Мәскәүҙә уҙған Рәсәй Яҙыусылар союзының XVII сираттан тыш съезында сәхнәнән республика Башлығы Радий Хәбировҡа яҙыусылар берләшмәһенә ярҙам саралары өсөн рәхмәт һүҙҙәре яңғыраны. Башҡортостан әҙәбиәткә булышлыҡ итеү йәһәтенән өлгөлө төбәк тип билдәләнде, 2024 йылда республикабыҙ "Рәсәйҙең әҙәби флагманы" статусын алды", - тип һөйләне "Башинформ"ға Айгиз Баймөхәмәтов. Әйткәндәй, Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Владимир Мединский Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы рәйесе - беренсе секретары итеп һайланды.

✔ Башҡортостанда Махсус хәрби операция ветерандары СберКарта юллай башланы. Аҡсалата тәьминәт ошо картаға күсерелә. Карталарҙы Һаҡлыҡ банкы бирә. Ошо карта ҡағыҙ таныҡлыҡты алмаштыра. Республикала уны алыу өсөн 313 кеше мөрәжәғәт иткән. "Хәҙер ҡағыҙ таныҡлыҡты үҙең менән йөрөтөргә кәрәкмәй - документ һанлы форматта һаҡлана, был бик уңайлы. Өҫтәүенә ветерандың Сберкартаһы банк сервистарына инеү мөмкинлеге бирә, был көндәлек тормошта кәрәк", - тип билдәләне ветерандарҙың береһе. Картаны Һаҡлыҡ банкы бүлексәһендә алырға мөмкин.

✔ 2025 йылда эшләмәгән һәм эшләп йөрөгән пенсионерҙар өсөн страховка пенсияһының уртаса күләме - 23,4 мең һумдан ашыу, ә ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһы 21,4 мең һумдан күберәк була. Был турала Рәсәй Пенсия һәм социаль страховкалау фондының республика буйынса бүлексәһе идарасыһы урынбаҫары Александр Никитин белдерҙе. Спикер билдәләүенсә, 1 февралдән улар 9,5 процентҡа индексацияланды. "Ҡайһы бер түләүҙәр республикала ҡулланылған район коэффициенты менән бәйле федераль түләүҙәрҙән айырылып тороуы ихтимал", - тип билдәләне Никитин.

✓ *Беҙҙең идеологик дошмандар шунан файҙаланырға тырыша ла инде: социаль селтәрҙәрҙә эш алып бара, аҡса вәғәҙә итеп, йәштәрҙе йәмғиәт законларына һыймаған эштәргә йәлеп итергә маташа.*



*ҠЫҪҠАСА*

# БАЛАЛАРҒА - БУШЛАЙ

**Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балалары өсөн уҡыу йылы барышында йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү тәртибе раҫланды.** Бындай хоҡуҡ менән 1-11-се (12-се) класс уҡыусылары, шулай уҡ 23 йәшкә тиклем урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарының көндөҙгө бүлектәре студенттары файҙалана ала. Документҡа ярашлы, МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балаларына 1 сентябрҙән 30 июнгә тиклем электрон юл йөрөү билеттары бирелә (улар уҡыусы картаһы, "Алға" берҙәм транспорт картаһы йәки "Мир" банк картаһы рәүешендә булырға мөмкин). Уларҙы ҡала йәмәғәт транспортында йәки ҡала яны маршруттарында файҙаланырға була. Мәғариф учреждениелары бының өсөн муниципалитеттарға ғаризалар ебәрергә тейеш. Артабан ғаризалар һәм документтарҙың күсермәләре (паспорт, СНИЛС, тыуыу тураһында таныҡлыҡ, хәрби комиссариаттан белешмә һ.б.) менән балалар исемлеге Башҡортостан социаль карталар регистрына тапшырыла. Электрон билет айына 60 тапҡыр бушлай йөрөү хоҡуғы бирә. Транспорт ойошмаларына республика ҡаҙнаһынан тейешле субсидиялар бүленә.

✓ **Башҡортостанда ОСАГО полисын автомобилде теркәү өсөн документтар исемлегенән алырға теләйҙәр, тип хәбәр иттеләр республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән.** Башҡортостан парламенты депутаттары Башҡортостан Республикаһының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында кодексына үҙгәрештәрҙе ҡарай. "Автомобилде теркәү ваҡытында күрһәтелә торған мотлаҡ документтар исемлегенән автограждандлыҡ яуаплылығын мотлаҡ страховкалау полисын төшөрөп ҡалдырырға тәҡдим ителә", - тине республика парламенты спикеры Константин Толкачев. Закон проекты транспорт сараларын дәүләт теркәүе процедураһын камиллаштырыуға һәм артыҡ нормаларҙы бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа билдәләүҙәренсә, ОСАГО полисын автомобилде теркәү өсөн мотлаҡ документтар иҫәбенән сығарыу ике ғәмәлде логик бүлеүгә нигеҙләнгән: транспорт сараһына эйә булыу һәм уны ҡулланыу. Автомобилде һатып алыу һәр ваҡыт уны тиҙ арала файҙаланыуҙы күҙ уңында тотмай. Хужа оҙаҡ ваҡыт автомобилде парковкала йәки гаражда һаҡларға һәм йөрөмәҫкә мөмкин. Бындай осраҡта страховка полисын кисекмәҫтән рәсмиләштереү талабы артыҡ һәм өҫтәмә финанс йөкләмәһе генә тыуҙыра. "Шул уҡ ваҡытта юл хәрәкәтендә ҡатнашыусылар өсөн бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр булмаясаҡ. Автограждандлыҡ яуаплылығы страховкаһы дөйөм ҡулланылыштағы юлдарға сығыу өсөн мотлаҡ талап булып ҡала. Тәҡдим ителгән яңылыҡ автомобиль хужаларына ОСАГО полисын рәсмиләштереү мәлен үҙаллы һайларға мөмкинлек бирә", - тип билдәләй Константин Толкачев.

✓ **Башҡортостандың Иглин районының үҫеш планы ҡайтанан ҡарала, тип хәбәр итте республика башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Муниципалитетта халыҡ һанының йылдам артыуы шуны талап итә.** "2021 йылда Иглин районында Хөкүмәттең күсмә ултырышы уҙҙы, сөнки унда бик күп проблемалар бар ине. Һөҙөмтәләр буйынса социаль-иҡтисади үҫеш планы ҡабул ителде. 120 пункттың 65-е бойомға ашырылды, 31-е өлөшләтә үтәлде. Һәйбәт һөҙөмтә, байтаҡ объекттар, мәҫәлән, Оло Теләктә социаль-мәҙәни үҙәк, Иглиндә мәктәп һәм физкультура-һауыҡтырыу комплексы, Көҙәй ауылында моделле китапхана асылды, 13 модулле фельдшер-акушерлыҡ пункты яңыртылды. Ләкин был план 2024-2025 йылдарға иҫәпләнгәйне, мин уны яңынан ҡарарға, хакимиәт менән берлектә яңыртылған юл картаһын төҙөргә һәм яңынан күсмә кәңәшмә ойоштороорға тәҡдим итәм", - тигән бурыс ҡуйҙы Хәбиров республиканың Министрҙар кабинетына.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ФӘН ҮҪЕШЕ - ИЛ КИМӘЛЕ УЛ

**Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко Башҡортостан Фәнни-технологик үҫеш буйынса дәүләт комитеты булдырыуҙы хупланы.**

"Дәүләт комитеты булдырыуҙы бик ваҡытлы ҡарар булды, тип иҫәпләйем, сөнки фәнни-технологик үҫеш теләһә ниндәй төбәктең һәм тотош алғанда теләһә ниндәй дәүләттең кимәлен билдәләй, - тине Үҙәк етәксеһе. - Яңы технологик заман шарттарында технологияны күтәрмәләү фән үҫешенән башҡа мөмкин түгел. Фән етештереү кимәле һәм фәнни проекттарҙы етештереү процесына индереү менән бер ҡатарҙан атларға тейеш. Тап әлеге яңы ойошма республика ғалимдарына үҙҙәренең эштәрен етештереү өлкәһенә индерергә ярҙам итергә тейеш. Икенсе мәсьәлә - фән менән сәнәғәт араһындағы бәйләнеште юлға һалыу. Фәнни эшләнештәр иҡтисад секторының ихтыяждарына яуап бирергә тейеш. Был иһә үҙ сиратында импортты алмаштырыу мәсьәләләре менән бәйле проблемаларҙы хәл итергә мөмкинлек бирә. Беҙ, әлбиттә, дәүләт комитетының бөтөн сараларында ҡатнашып, фәнни-технологик үҫеш стратегияһын эшләүҙә һәм уны ҡулланыуға индереүҙә ярҙам итәсәкбеҙ".

Василий Мартыненко билдәләүенсә, республикала йәш ғалимдарҙы күтәрмәләү буйынса ғәйәт ҙур хәстәрлек күрелә. Был фәнни-мәғариф программалар, стажировкалар, йәштәр лабораториялары булдырыуҙа ла, уларға торлаҡ сертификаттары тапшырыуҙа ла асыҡ күренә. Республика Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән Башҡортостанда Рәсәйҙә беренселәрҙән булып "Йылдың йәш ғалимы" исеме булдырылып, уларға 150-шәр мең һумлыҡ ете исемле премия тапшырыла.

# ЙӘШТӘР МИНИСТРЛЫҒЫ БУЛА!

**Башҡортостан Республикаһында Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитетын тулы вәкәләтле министрлыҡ итеп үҙгәртеү был өлкәнең өҫтөнлөклө йүнәлеш алыуы хаҡында һөйләй.**

Был ҡарар бик ваҡытлы һәм нигеҙле. Башҡортостан - илдәге иң йәш төбәктәрҙең береһе. Йәштәр республика халҡының дүрттән бер өлөшөнән күберәген - 26 процентын тәшкил итә, йәғни Башҡортостанда уларҙың һаны 1 млн 57 мең кеше. Республикала йәштәр сәйәсәте статусын күтәреү мәсьәләһенең мөһимлеге хаҡында тарих фәндәре кандидаты, сәйәсмән Сергей Лаврентьев түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Йәштәр хаҡында һәр ваҡыт хәстәрлек күрелде. Был бик мөһим һәм ул шулай булырға тейеш тә. Дөрөҫ, бөгөнгө йәштәрҙең үҙҙәренә күрә мауығыуҙары бар, мәҫәлән, гаджеттар һәм компьютерҙар менән. Бынан тыш, бөгөн йәмғиәттә ҡасанға ҡарағанда булһа ла аҡса мәсьәләһе мөһимерәк роль уйнай. Беҙҙең идеологик дошмандар шунан файҙаланырға тырыша ла инде: социаль селтәрҙәрҙә эш алып бара, аҡса вәғәҙә итеп, йәштәрҙе йәмғиәт законларына һыймаған эштәргә йәлеп итергә маташа. Шуға күрә лә бөгөн йәштәр менән эште үҙгәртеп ҡорорға, улар менән аңлаша белергә, ихлас булырға кәрәк, шунда ғына һөҙөмтәгә өлгәшеләсәк. Бының өсөн профессиональ белгестәре булған тейешле структуралар ойоштороу, төрлө саралар үткәрергә аҡса бүлеү кәрәк. Дәүләт комитетын министрлыҡ итеп үҙгәртеп ҡороуҙа республика етәкселеге тап ошо мәсьәләләрҙе күҙҙә тота ла инде. Радий Хәбиров даими рәүештә Башҡортостан йәштәре менән осрашып аралашырға тырыша. Мәҫәлән, уның ҡатнашлығында "Патриот" паркында мәктәп уҡыусылары, студенттар йәш эшҡыуарҙар менән даими осрашыуҙары матур йолаға әүерелде. "Радий Фәрит улы йәш сағында үҙе лә йәштәр хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашты, ул ваҡыттағы БДУ-ның студенттар, профсоюзы рәйесе булды, студенттар ялын ойоштороуҙа, студенттар төҙөлөшө эшендә әүҙемлек күрһәтә ине. Уның ошо тәжрибәһе йәштәр менән аралашыуҙы тағы ла яҡыныраҡ итә. Йәштәр өсөн бындай осрашыуҙар бик мөһим, - тине Сергей Лаврентьев.

**Роман ЯКИМЧУК.**

# УЛАРҒА МУНСА ЛА КӘРӘК!

**Салауат районының Малаяҙ ауылында йәшәүсе Хәрби хәрәкәттәр ветерандары союзы етәксеһе Рөстәм Хөснуллин МХО башланғандан алып хәрби хәрәкәттәр биләмәһенә 20-нән ашыу тәгәрмәсле мунса эшләп ебәргән.**

- Тәүге мунсаларҙы әҙерләп оҙатҡандан һуң, һалдаттар үҙҙәре һорап мөрәжәғәт итә башланы. Улар бит икешәр ай буйы мунса күрмәй. Әле "Өфө" позывнойлы яҡташым: "Ағай, ярҙам ит инде", тигәс, тағы эшкә тотондом. Мунсаларҙы әҙерләргә райондаштар, хәрби хәрәкәттәр ветерандары әүҙем ярҙамлаша: кемдер - аҡсалата, кемдер - төҙөлөш материалдары менән. Ауыл ир-егеттәре мунсаларҙы ҡорорға ярҙам итә. Район эшҡыуары, Хәрби-диңгеҙ флоты ветерандары союзы рәйесе Исрафил Хаировҡа айырыуса ҙур рәхмәт, - тип һөйләгәйне Рөстәм Хөснуллин.

Ул алыҫ 2015 йылда уҡ Донбасс ерҙәренә барып ҡайта. Украина тарафтарында хәл-ваҡиғалар киҫкенләшеп киткәндән һуң, зыян күргән халыҡҡа ярҙам күрһәтә, бынан тыш, Бөйөк Ватан һуғышында башын һалған батырҙарыбыҙҙың эҙҙәре буйлап йөрөй. "Гуманитар йөк ташыныҡ. Шул ваҡытта уҡ сәйәси ваҡиғалар киҫкенләшкәйне. Махсус хәрби операция башланғас, Афған һуғышын үткән ветеран булараҡ, яугирҙарға ярҙам итеүҙе үҙемдең төп бурысым итеп күрҙем. Ошо көнгәсә ул тарафтарға 31 тапҡыр барып ҡайттым", - ти Рөстәм Хөснуллин.

МХО башланғас та ветеран үҙенең ҡапҡа алдын ҙур оҫтаханаға әйләндерә. Яугирҙарға 14 мобиль мунса әҙерләп, алғы һыҙыҡҡа оҙата, ҡайһыларын үҙе алып бара. Бынан тыш, халыҡ менән бергә егеттәр өсөн машиналар һатып алып ремонтлай. Рөстәм Хөснуллин утыҙ йылдан ашыу ғүмерен йәш быуынды уҡытыуға бағышлаған. Бөгөн Дыуан күп профилле колледжының Малаяҙ филиалында эшләй. "Эштәребеҙҙе "Атайсал" проектында теркәнек. Республика Башлығы Радий Хәбировтың башланғысы менән булдырылған проекттың халыҡҡа файҙаһы бик ҙур. Радий Фәрит улы МХО башланыу менән егеттәргә ҙур ярҙам күрһәтә, үҙе лә даими рәүештә яугирҙар янына барып тора", - ти Рөстәм Нәбиулла улы.

Рөстәм Хөснуллин йәнә алғы һыҙыҡҡа әҙерләнә, һалдаттар өсөн иң кәрәкле ярҙам йыйыла - тәгәрмәсле мунсалар, УАЗ "буханкаһы", эш ҡоралдары һәм башҡа кәрәк-яраҡтар.

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓ Йылайыр районында өсөнсө тапҡыр "Ямanташ" экстрим-туры үткәрелгән. Был сара сәләмәт йәшәү рәүешен популярлаштырыуға, экстремаль шарттарҙа иҫән ҡалыу күнекмәләрен үҙләштереүгә һәм тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш формалаштырыуға йүнәлтелгән. Быйыл ярыштарҙа "Ямanташ рухы", "Башмедь", "Антистресс" командалары үҙ-ара көс һынашҡан. Ярыш һөҙөмтәләре буйынса, "Башмедь" командаһы еңеү яулаған.

✓ Сибайҙың "Ирәндек" боҙ һарайында шөғөлләнеүсе Арина Князева, Мәҙинә Солтанғолова, Арсен Ҡырымғужин һәм Арсен Сәлмәнов - конькиҙа йүгереү спорты (шорт-трек) буйынса "Ю.А. Павловскийҙың иҫтәлегенә" тип аталған Бөтә Рәсәй ярыштарында эстафетала алтын миҙалға лайыҡ булған. Ярыштар 2025 йылдың 22 февралендә Санкт-Петербургта 12-13 һәм 9-11 йәшлек малайҙар һәм ҡыҙҙар араһында үтә.

✓ Бөрйәндә район ҡумыҙсылар бәйгеһе үткән. Конкурста 60-тан ашыу ҡумыҙсы ҡыҙҙар һәм егеттәр ҡатнашҡан. Улар араһында Гран-приға Нәби мәктәбе уҡыусыһы Ғаяз Вәлиев лайыҡ булды, тип хәбәр итә райондың "Таң" гәзите: "Конкурс башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында башҡарыу традицияларын һаҡлау, тергеҙеү һәм артабан үҫтереү, талантлы башҡарыусыларҙы асыҡлау, йәш быуынды башҡорт инструменталь фольклорына ылыҡтырыу, ҡумыҙҙа уйнау һәм өҙләү сәнғәтен пропагандалау маҡсатында уҙғарылды", - тип яҙа гәзит.

✓ Стәрлетамаҡ районында йәшәгән Фатима Кантюкова 100 йәшлек юбилейын билдәләне. Был хаҡта Наумовка ауыл советы депутаты Фәриҙә Кантюкова хәбәр итә. Юбилярҙы йөҙ йәшлек юбилейы менән Салауат ҡалаһы хакимиәте, Наумовка ауыл советы вәкилдәре ҡотланы. Фатима Кантюкова - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, биш орден кавалеры, Совет армияһы майоры Фазлыйәхмәт Шәрәфи улы Кантюковтың тол ҡатыны. Бөгөн йөҙйәшәр инәй яҡындарының, балаларының һөйөүенә һәм хәстәрлегенә сорналып йәшәй. Өс ейән-ейәнсәре һәм өс бүлә-бүләсәре бар.

✓ Башҡортостанда ғашиҡ парҙар никахтарын теркәү өсөн матур датаны һайларға тырыша. Мәҫәлән, 2025 йылдың 25 февралендә 143 пар сәстәрен сәскә бәйләне. Был хаҡта Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетынан хәбәр иттеләр. Ведомствола белдереүҙәренсә, быйыл өйләнешеүселәр 25 һаны булған даталарға иғтибар итә. Календарҙа киләһе ошондай матур дата- 2025 йылдың 25 майы, ул йәкшәмбегә тура килә.

АФАРИН!

# ИҢ ӘҮҘЕМ ӨС ТӨБӘК ИСӘБЕНДӘБЕҘ



**Сәйәси мәғлүмәт үҙәгенең "Рәсәй төбәктәрен Махсус хәрби операцияға йәлеп итеү" тип аталған докладында ил төбәктәренең МХО-ға ярҙам итеү буйынса әүҙемлеге баһалана. Унда иң әүҙемдәр рейтингына 15 төбәк индерелгән. Лидерҙар иһә - Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе, Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе, Башҡортостан.**
**РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы Байғускаров республикабыҙҙың шундай юғары баһа алыуы айҡанлы үҙ фекерен еткерә:**

- Башҡортостан 1557 йылда үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылғандан алып дөйөм Ватаныбыҙҙы һаҡлау буйынса үҙ иңенә алған йөкләмәһен намыҫ менән үтәй. 1812 йылда Наполеонға ҡаршы һуғышта башҡорттар 28 полк ҡуя. Ҡыйыулыҡтарына, уҡтан мәргән атыуҙарына хайран ҡалған француздар ата-бабаларыбыҙҙы "Төньяҡ амурҙары" тип хайран ҡала. Ватансылыҡ бурысына тоғро Башҡортостан халҡы 1941 - 1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фронтта һәм тылда баһалап бөткөһөҙ ҡаһарманлыҡ күрһәтә. 112-се Башҡорт атлылары дивизияһы дошман тылдары буйлап рейд менән үтә, Рәсәй Геройы генерал Шайморатов башын һалған Украина ерҙәрен азат итеү өсөн батырҙарса алыша. Бөгөн дә, илебеҙ хәүефһеҙлеге өсөн көрәшкә күтәрелгән бер мәлдә, Башҡортостан юғары әүҙемлек күрһәтә. Республикала генерал Шайморатов, Салауат Юлаев, Доставалов һәм башҡа геройҙар исемендәрен йөрөткән батальондар төҙөлдө. Яҡташтарыбыҙ алғы һыҙыҡта, яугирлыҡ рухына тоғро ҡалып, Ватаныбыҙ мәнфәғәттәрен яҡлап, батырҙарса һуғыша.

Башҡортостан үҙенең яугирҙарына һәм уларҙың ғаиләағзаларына даими ярҙам күрһәтә. Дөйөм алғанда, республикала 40-тан ашыу ярҙам саралары законлаштырылған. Улар исәбендә - мәктәпкәсә йәштәге балалар, уҡыусылар һәм студенттар өсөн льготалар, белем алыу һәм профессиональ үҫеш, социаль хеҙмәттәр, ял һәм сәләмәтләндереү өсөн өҫтәмә мөмкинлектәр, көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеүҙә ярҙам. МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн төбәк шифаханаларында бушлай һаулыҡтарын нығытыу ҙа ҡаралған. Махсус хәрби операция зонаһына гуманитар конвой оҙатыу ныҡлы юлға һалынған. Республиканан ошо көнгә, һәр ҡаланан, һәр районда киткәндәренән тыш, барлығы 144 конвой ойошторолдо. Был эштә шулай уҡ бөтә йәмәғәт һәм дини ойошмалар ҙа әүҙем ҡатнаша, һәр ауылда маскировка селтәрҙәре үрәләр, окоп шәмдәре ҡоялар, быҡтырылған ит, бауырһаҡ, сәк-сәк бешереп әҙерләйҙәр.

Башҡортостандың МХО-ға иң әүҙем ярҙам иткән өс төбәк исәбенә инеүендә ярҙам сараларын ойоштороуҙа яҡындан тороп ҡатнашҡан республика Башлығы Радий Хәбировтың роле ҙур. Ул Рәсәй төбәктәре етәкселәре араһынан тәүгеләрҙән булып 2022 йылдың мартында гуманитар конвойға фатиха бирҙе. Үҙе даими Махсус хәрби операция зонаһында була, хәрбиҙәргә наградалар тапшыра. Дөйөм сығымдар ҙа башҡаларға ҡарағанда беҙҙә тораҡ. Контракт төҙөгәндәр республиканан 60 мең һум өҫтәмә түләү ала. Мин үҙем яугирҙар менән даими аралашып торам. Улар яҡташтарынан килгән ярҙам менән бик ҡәнәғәт, башҡа подразделениеларҙың хәрбиҙәре беҙгә көнләшеп ҡарай, тиҙәр.

Башҡортостан Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһын шефлыҡҡа алған. Әле унда 114 объект тергеҙелгән, юлдар һалына, социаль инфраструктура яңыртыла.

Ғөмүмән алғанда, республикабыҙ МХО-ға иң әүҙем ярҙам иткән лидер төбәктәр араһына хаҡлы рәүештә инә. Халыҡтың шундай берҙәмлеге, хәлдә аңлап ҡабул итеүе ҡыуандыра. Сөнки алғы һыҙыҡҡа тылдан ярҙам булмаһа, Ватаныбыҙ хәүефһеҙлеген һаҡлаусыларға ауырға тура килер ине. "Тыуған яҡтан кәрәк әйберҙәрҙең килеп тороуы күңелдәрҙе йылыта. Тимәк, унда беҙҙе онотмайҙар, хәлебеҙҙе белеп торалар, беҙҙең менән теләктәштәр. Был беҙгә көс бирә", - ти егеттәр аралашҡанда.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## АҠРЫН ЙӨРӨҺӘҢ - ШТРАФ!



**Рәсәйҙә автомобилдә аҡрын йөрөгән өсөн штрафтарҙы өс мең һумға тиклем арттырыуҙары мөмкин.**

Бындай башланғыс менән Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты, ЛДПР фракцияһы вәкиле Иван Сухарев сығыш яһаны. Бында һүҙ сәғәтенә 30 км тиҙлектә йөрөгән водителдәр һәм машинаға "Аҡрын йөрөүсе транспорт сараһы" махсус ярлығы йәбештермәгән водителдәр тураһында бара. "Махсус билдә ҡуйылмаған аҡрын йөрөүсе транспорт саралары даими рәүештә ҙур аварияларға сәбәпсе була. Шулай уҡ үтә лә әкрен йөрөүселәр арҡаһында башҡа водителдәр уларҙы үҙып китергә мәжбүр була һәм штрафтарға юлыға. Был проблеманы "Таныу билдәһе"нең булыуы хәл итер ине, әммә уны ҡуйырға ашыҡмайҙар, сөнки билдә булмаған өсөн штраф күләме 500 һум ғына. Бындай вайымһыҙ водителдәр үҙҙәренең яуапһыҙлығы өсөн аҡса менән яуап бирергә тейеш", - тип аңлатма бирҙе Иван Сухарев.

ҠЫҪҠАСА

## ҠУНАҠТАРҒА ШАТБЫҘ!

**Өфө илдең иң ҡунаҡсыл ҡалалары рейтингында өсөнсө урында тора. Уны SuperJob порталы төҙөгән. Башҡортостандың баш ҡалаһы Волгоградтан һәм Омскиҙан ғына ҡалыша. Дүртенсе урында - Ҡаҙан, бишенсеlә - Силәбе.** Рейтингты төҙөү өсөн ҡала халҡынан туристарҙың артыуын хуплаймы-юҡмы икәнен һорағандар. Өфөлә халыҡтың 64 проценты "эйе" тип яуап биргән. Был көндәрҙә үткән кҫсмә "Инвестиция сәғәте"ндә туристарҙы ылыҡтырыу юҫығында артабанғы перспективалар тикшерелде. "Беҙҙең ҡалалағы ландшафт бик үҙенсәлекле һәм матур , ул "Зиплайн" күңекмә-күңел асыу комплексы кеүек үҙенсәлекле проекттарҙы бойомға ашырырға мөмкинлек бирә, - тип яҙа Өфө мэры Ратмир Мәүлиев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Был урындан Өфөнө яңы ракурстан күрергә мөмкин - урман, ҡаялар, йылға. Ғөмүмән, Телеүҙәк янында бынамын тигән туристик маршрут астыҡ. Бында Һыу ҡыуҙырыу башняһы бар, уның биләмәһен төҙөкләндереү эшен дауам итәбеҙ. Беҙ Өфөлә туризмды үҫтереүгә яҡшы этәргес бирҙек. Ҙур комплексты эш үҙ һөҙөмтәләрен бирә. Туристар ағымын 1,5 тапҡырға арттырҙыҡ, илебеҙҙең иң ҡунаҡсыл өс ҡалаһы исемлегенә индек. Был иһә халыҡтың изге күңелле булыуы, эшҡыуарҙарҙың яҡшы көйөфе тураһында һөйләй. Һәр берегеҙгә рәхмәт. Алда тағы ла ҙурыраҡ маҡсаттар һәм бурыстар көтә".

✓ **Быйыл Өфөнөң Глумилин биҫтәһендә 1225 урынлыҡ яңы мәктәп асыу планлаштырыла. Был хаҡта Октябрь районы башлығы Антон Тарасов хәбәр итте. Ул инспекция менән төҙөлөш барған объектта булды.** "Глумилин биҫтәһендә 1225 урынға иҫәпләнгән мәктәп төҙөлөшөн тикшерҙем. Урында подряд ойошмаһы вәкилдәре менән осраштыҡ һәм төҙөлөш-монтаж эштәре барышын тикшерҙек. Тышҡы һәм эске инженер селтәрҙәрен һуҙыу, шулай уҡ бүлмәләр һалыу эштәре тамамланып килә, тине коллегалар. Киләһе аҙнала тәҙрә блоктарын ҡуйыу планлаштырыла. Был объект беҙҙең өсөн бик мөһим, шуға күрә эштәрҙең барышын даими контролдә тотам", - тип яҙҙы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Антон Тарасов шулай уҡ район хакимиәтенең яңы белем биреү учреждениеһы өсөн белгестәр һайлап алыу эшенең башланыуын әйтте. Мәктәпкә уҡытыусылар, тәрбиәселәр, педагог-психологтар һәм етәкселек хеҙмәткәрҙәре талап ителә.

✓ **Башҡортостанда торлаҡ зонаһында төндә алкоголь һатыуҙы тыйыу 2025 йылдың 1 мартында көсөнә инде.** "Башҡортостанда этиль спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү һәм әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү һәм алкоголле продукцияны ҡулланыуҙы (эсеүҙе) сикләү тураһында"ғы республика законына тейешле үҙгәрештәр индерелде. Был хаҡта республика парламентының матбуғат хеҙмәте иҫкә төшөрә. Хәҙер киске 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем күп фатирлы йорттарҙа йәки уларға яҡын территорияла урынлашҡан дөйөм туҡланыу объекттарында (ресторандарҙан тыш) алкоголле ваҡлап һатыу тыйыла. Яңы йыл төнөндә генә (31 декабрҙән 1 гинуарға) учреждениелар төндә өҫтәмә рәүештә 4 сәғәт һата ала. БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, төнгө 11-ҙән һуң алкоголь һатыуҙы тыйыу дөйөм туҡланыу учреждениеларында "наливайка" нөктәләре проблемаһын да хәл итергә тейеш.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров булышлығында үткәрелгән III "Китап байрамы" халыҡ-ара йәрминкәһендә ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул ителә. Быйыл сара 30 майҙан 1 июнгә тиклем Өфөнөң Совет майҙанында ойошторола. "Китап байрамы"нда Рәсәй һәм сит ил нәшриәттәре, китап һатыу фирмалары һәм китап магазиндары, китапханалар һәм полиграфия предприятиелары ҡатнаша ала. Йәрминкәлә ҡатнашыу өсөн рәсми сайтта форманы тултырырға кәрәк. "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе 2023 йылдан башлап уҙғарыла. Былтыр Өфөлә Рәсәйҙең 18 төбәгенән һәм 7 илдән (Беларусь, Азербайжан, Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Сәғүд Ғәрәбстаны) 233 нәшриәт үҙ продукцияһын тәҡдим итте.

✓ Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығында уҙған йылда республикала ришүәттең уртаса күләмен атанылар. "Ришүәттең" суммаһы 131 мең һум тәшкил итте. Уның һүҙҙәренсә, полиция хеҙмәткәрҙәре коррупция йүнәлешендәге ике меңдән ашыу енәйәтте асыҡлаған. "Былтыр йәмғеһе меңгә яҡын ошондай енәйәт эше туҡтатылған, 247 кеше яуаплылыҡҡа тарттырылған", - тип белдерҙе ведомство етәксеһе республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 19-сы ултырышында.

✓ Башҡортостандың элекке транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Клебанов вафат булған. Сәбәбе - онкология, тип хәбәр итә Ufanovosti.ru порталы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, экс-чиновник айырыуса ҙур күләмдә ришүәт алыу тураһында эш буйынса ғәйепләнде. Ул республика вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы Алан Марзаевҡа ҡаршы күрһәтмәләр бирҙе. Тикшереү барышында Александр Клебановтың транспорт һәм юл хужалығы министры һәм "Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәтенең директорҙар советы ағзаһы булған ваҡытта "Киви" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте етәкселегенән хеҙмәт буйынса дөйөм ҡурсалау өсөн 5 миллион һум ришүәт алыуы асыҡланды.

✓ Өфө блогеры Рөстәм Нәбиев - Рәсәйҙең "Белем" йәмғиәте булдырған "Белем. Премия" наградаһы лауреаты. Яҡташыбыҙ "Спорт һәм сәләмәт йәшәү рәүеше" өлкәһендә белем биреүгә индергән өлөшө өсөн билдәләнде", тип хәбәр итте ойоштороусылар. Бүләкләү тантанаһы 27 февралдә Мәскәүҙең "Рәсәй" милли үҙәгендә уҙҙы. Нәбиевҡа каучуктан яһалған кубокты - көс һәм ныҡлыҡ билдәһен Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко тапшырҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, яҡташыбыҙ донъяла ҡулдары менән алты тауға менгән беренсе кеше булды. 2020 йылда Рәсәйҙең һәм Европаның юғары нөктәһен - Эльбрусҡа (5642 метр) артылғандан һуң Рәсәйҙең Рекордтар китабына инде. Бер йылдан һуң ул Непалдың 8163 метр бейеклектәге Манаслу тауына күтәрелде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Яңы закон буйынса участканы артабан төҙөүгә әҙерләүгә өс йыл бирелә. Һүҙ территорияны сүп-сарҙан таҙартыу, рельефты тигеҙләү тураһында бара. Өс йыл үткәс, уны тәғәйенләнеше буйынса файҙалана башларға кәрәк.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡарағанат аҡсарлаҡ

**(Клуша)**



Ҡарағанат аҡсарлаҡтар менән беҙ аҡсарлаҡтар төркөмөн башлап ебәрәбеҙ. Улар аҡ төҫтәге, ҡара/һоро арҡалы һәм ҡанатлы ҡоштар. Ҡарағанат аҡсарлаҡ эре генә, ҡарға ҙурлығында. Башы, кәүҙәһе аҡ төҫтә. Ҡанатының өҫкө өлөшө, арҡаһы һәм ҡанатының остары - ҡара. Суҡышы - һары, тәпәйҙәре һары йәки ҡыҙғылт һары.

Рәсәйҙең диңгеҙ һәм оло күлдәре утрауҙары һәм ҡаяларында ҙур булмаған колониялар менән йәшәй. Башҡортостанда осоп китеп барышлай ғына туҡтап китеүе бар. Мәҫәлән, 1990 йылдың апрелендә Ағиҙел менән Кама йылғалары араһында 15 көн эсендә 3 ҡарағанат аҡсарлаҡ күрергә насип булды. Талҡаҫ күлендә яңғыҙ ҡарағанат аҡсарлаҡ осратырға мөмкин.

## Аҡбаш аҡсарлаҡ

**(Южная серебристая чайка)**



Эре ҡош, ҡарғанан ярайһы ҙур, йәйелгән көйөнә ҡанаттарының киңлеге 1,3 метр. Башы - аҡ, арҡаһы һәм ҡанаттары аҡһыл ялтырауыҡ төҫтә. Суҡышы ҙур, тәпәйҙәре алһыу. Ҡанатының осо ҡара, аҡ таптары бар. Йәш ҡоштар ҡараҡ төҫтә. Тауышы көслө, сағыу. Ҡош туйы осоронда һуҙып-һуҙып ҡысҡыра, хәүеф янағанда "кав-кав-кав" тигән тауыштар сығара.

Рәсәйҙең көньяғындағы диңгеҙ ярҙарында оя ҡора. Үткән быуатта Шиңгәккүл, Асылыкүл һәм Учалы районында Ҡарағайлы күле тирәһендә осрай ине. АССР-ҙың Ҡыҙыл китабына ла индерелгән.

Аҡбаш аҡсарлаҡ сағыштырмаса иртә ҡайта, март башында яңғыҙ йәки күмәкләп осоп ҡайталар. Был ваҡытта әле ҡар ята, йә йылға-күлдәр боҙҙан әрселмәгән була.

Ояларын һыу ятҡылыҡтары ярҙарына ҡора. 3 йомортҡа һала, 22-28 көн баҫа. 6,5-7 аҙналыҡ бәпкәләр үҙ аллы оса башлай. Улар ояны ташлап, яңғыҙҙары йәки башҡа ҡоштар менән күмәкләп йәшәй, август аҙаҡтарында ҡышлау урындарына ҡуҙғала башлайҙар.

Башлыса үлгән йәки ауырыу балыҡ менән туҡлана. Мәҫәлән, Карман балыҡ хужалығында улар һыуҙан сығарып ташланған үлгән балыҡтарҙы ашай. Йомортҡа һәм яңы ғына сыҡҡан бәпкәләргә лә һөжүм итә, үҙе ҡараған төркөм ҡоштарын да тота. Бынан тыш, алйырҙан, йомрандар, сүп-сар түгелгән урында аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтары менән туҡлана. Оҙаҡ йәшәй, ғалимдар 32 йыл йәшәгән ҡошто күҙәтә. Был ҡош иректә йәшәй, ә бына тотҡонда 50 йыл йәшәгән ҡош та билдәле.

Ырымбурҙа аҡбаш аҡсаралаҡ йылдан-йыл күбәйә барған ҡоштар төркөмөнә ҡарай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

**Рәсәйҙә 2025 йылдың 1 мартынан шәхси торлаҡ төҙөү һәм баҡсасылыҡ өсөн бирелгән ер участкаларын файҙаланыуға ҡағылышлы ҡануниәткә үҙгәрештәр көсөнә инә. Үҙгәрештәр ерҙе файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелеген арттырыуға йүнәлтелгән, ти Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Петр Клец.**

# УЧАСТКАҢ ТАШЛАНДЫҠ ХӘЛДӘМЕ?



Клец аңлатыуынса, ер участкалары хужалары милек хоҡуғын алғандан һуң өс йыл эсендә уларҙы үҙләштерә башларға тейеш. Әгәр хужа был ваҡытта үҙләштереүгә тотонмаһа, дәүләт бындай участканы тартып алырға һәм уны аукционға ҡуйырға хоҡуҡлы. "Дәүләт тартып алыу кеүек маҡсатты күҙ уңында тотмай, - ти территориаль Росреестр етәксеһе. - Яңы закон ерҙе әүҙем файҙаланыуҙы дәртләндереүгә, тораҡ пункттарҙың инфраструктураһын яҡшыртыуға һәм участкаларҙың йылдар буйына ташландыҡ хәлдә ҡалыуын булдырмауға йүнәлтелгән. Йорт төҙөүҙе йәки баҡсасылыҡ эшмәкәрлеген алып барыуҙы планлаштырыусылар хәҙер үҙ ерен файҙаланыуға яуаплыраҡ ҡараясаҡ".

Яңы закон буйынса участканы артабан төҙөүгә әҙерләүгә өс йыл бирелә. Һүҙ территорияны сүп-сарҙан таҙартыу, рельефты тигеҙләү тураһында бара. Ерҙе үҙләштереү өсөн бирелгән өс йыл үткәс, уны тәғәйенләнеше буйынса файҙалана башларға кәрәк. Ошо мәлдән милексе участканы файҙаланмағаны өсөн яуап тота. "2025 йылдың 1 мартынан һуң һатып алынған, бүләк ителгән участкаларҙы үҙләштереүҙе башларға кәрәк. Милектә булған участкалар буйынса ваҡыт 2025 йылдың 1 мартынан иҫәпләнә, - тип аныҡлыҡ индерҙе Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе. - Ҡабул ителгән нормаларҙың бурысы - милекселәрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыу йәки уларҙан ерҙе тартып алыу түгел, ә уларҙы үҙ участкаларына ҡайтарыу. Өҫтәп әйтәм, яңы штрафтар йәки тәғәйенләнеше буйынса участканы файҙаланмаған өсөн башҡа яуаплылыҡ саралары индерелмәй.

Бөгөн Рәсәй хөкүмәтендә ерҙе үҙләштереүҙе һәм файҙаланмауҙы билдәләү өсөн аныҡ критерийҙар бар. "Башинформ" агентлығы һорауына яуап биреп, Петр Клец, Башҡортостанда ер ҡануниәтен боҙоуҙарҙың яртыһынан күберәге участкаларҙы файҙаланмауға бәйле, тине. Яңы нормаларҙың үтәлешен Росреестр һәм урындағы үҙидара органдары контролдә тотасаҡ. Ҡағиҙә боҙоуҙар асыҡланһа, хужаларға күрһәтмә биреләсәк һәм был күрһәтмәне иғтибарһыҙ ҡалдырған осраҡта ғына ҡәтғиерәк саралар күреләсәк, тип билдәләне ул. Мәҫәлән, 2024 йылда төбәктә Росреестр тарафынан 4 мең самаһы файҙаланылмаған участка асыҡланған. Муниципалитеттар тағы ла меңдән ашыу ошондай участка тапҡан.

Әгәр милексе объектив сәбәптәр арҡаһында участканы үҙләштерә алмаһа, ул раҫлаусы документтар тапшыра йәки ҡағиҙә боҙоуҙы бөтөрөү ваҡытын оҙайта ала. Шулай уҡ участканы өсөнсө кешеләргә ҡуртымға йәки бушлай файҙаланыуға тапшырыу мөмкинлеге бар.

Билдәләүҙәренсә, ер участкаларын үҙләштереү критерийҙары аныҡ булмауы сәбәпле, файҙаланылмаған ерҙәрҙең, шулай уҡ халыҡтың ризаһыҙлығын тыуҙырған оҙайлы төҙөлөштәрҙең артыуы раҫланған. Яңы закон янғын хәүефһеҙлеген, санитар хәлде һәм тораҡ пункттарҙың йөҙөн яҡшыртасаҡ. Бынан тыш, хоҡуҡ эйәләре хәҙер ниндәй хаталарҙан ҡасырға кәрәклеген беләсәк һәм уларҙы булдырмау өсөн алдан саралар күрә аласаҡ. "Был закон халыҡтың киң ҡатламының һәм, әлбиттә, муниципалитеттарҙың иғтибарын талап итә, сөнки ниндәйҙер проблема килеп тыуһа, кеше муниципалитеттарға, депутаттарға барасаҡ. Былтыр ғына Башҡортостанда 3 миллион квадрат метрҙан ашыу торлаҡ файҙаланыуға тапшырылыуы ла закондың масштабын һәм киң әһәмиәтен асыҡ күрһәтә, торлаҡтың 70 проценты иһә - шәхси йорт төҙөлөшө. Шуға күрә федераль ҡануниәттәге үҙгәрештәр бик күп рәсәйҙәргә ҡағыласаҡ", - тип аңлатма бирә БР Муниципаль берәмектәр ассоциацияһының башҡарма директоры Марат Ғәлиуллин.

Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары Кристина Недорезова хәбәр итеүенсә, март айында Өфөлә ер участкаларын үҙләштереү һәм файҙаланыу буйынса яңы законға арналған "түңәрәк өҫтәл" үтәсәк. Ултырышты Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы ойоштора. Уның эшендә Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы һәм башҡа ҡыҙыҡһынған ведомстволар вәкилдәре ҡатнашыр тип көтөлә.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ЙОРТОҢДО ТЕРКӘҮ МОТЛАҠ!



**2025 йылдың 1 мартынан төҙөлгән йорттарға һәм биналарға хоҡуҡты теркәү мотлаҡ буласаҡ, тинеләр Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәтендә.**

2025 йылдың 1 мартынан "РФ-ның айырым закондар сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль закон көсөнә инә, ул "Построил-оформи" яңы принцибын индерә. Был законға ярашлы, төҙөлөш тамамланғас, граждандың йәки ойошманың бындай объектҡа хоҡуҡ теркәү бурысы барлыҡҡа килә, шул иҫәптән көнкүреш күсемһеҙ милкенә хоҡуҡтарҙы рәсмиләштереүҙең ябайлаштырылған тәртибен файҙаланып (мәҫәлән, "дача амнистияһы" сиктәрендә). Яңы закон төҙөлгән һәм файҙаланылған биналарға һәм ҡоролмаларға ҡағылмай.

"Күсемһеҙ милек хужаһына шуны аңлау мөһим: әгәр ул объектҡа хоҡуғын теркәмәһә, ул уның хужаһы тип иҫәпләнмәй. Был мөлкәт хоҡуғын яҡлау йәһәтенән хәүеф тыуҙыра. Ғәҙәттән тыш хәлдәр дәүләт тимер юлдары өсөн ер участкаһын тартып алыу йәки ер һәм мөлкәт бәхәсе барышында айырыуса киҫкенләшергә мөмкин. Бындай осраҡтарҙа күсемһеҙ милеккә хоҡуҡ булыуын иҫбатлау етди проблемаға әйләнә. Закон менән "Построил-оформи" принцибы индерелә, уға ярашлы, төҙөлгән биналарҙы һәм ҡоролмаларҙы (мәҫәлән, коммуникацияларҙы тоташтырырға) уларҙы рәсмиләштергәндән һуң ғына файҙаланырға мөмкин", - тип аңлатма бирҙе Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Петр Клец.

Росреестр баһалауынса, һәр төбәк территорияһында билдәләнгән тәртиптә теркәлмәгән 1 меңдән 5 меңгә тиклем шәхси торлаҡ йорт бар. Элек ҡануниәт уларҙы рәсмиләштереүҙе тәьмин итеү сараларын күҙ уңында тотмай ине. Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылда республика халҡы "Дача амнистияһы" буйынса ябайлаштырылған тәртиптә 18,5 меңдән ашыу торлаҡ йортто рәсмиләштергән, был 2023 йылға ҡарағанда 23 процентҡа күберәк (15 мең).

**Галина БАХШИЕВА.**

✓ *Өфө-II ҡаласығы уникаль археологик һәйкәл булып тора, уның әһәмиәтен соҡор артындағы ҡәберлек тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Обручев шәхси тормошонда бик һаран кеше була. Бер саҡ ул масленица байрамына һайлап саҡырылған интеллигенция вәкилдәрен Николаев урамы буйлап тау битенән санала шыуҙырып күңел асырыу маҡсатында санакәмә яһатырға ҡуша. Кәмәне уның йорто янына алып килгәс, осталарға түләр өсөн икеме, өсмө һум (тиндәре менән) аҡса етмәүе хаҡында белдерәләр. Обручев ошо сумманы баҡыр тиндәренә тиклем үҙе иҫәпләп бирә.

Төбәктең баш начальнигы булараҡ, ул тантаналы көндәрҙә ҙур аш мәжлестәре һәм балдар уҙғарырға тейеш була. Быны өсөн хеҙмәтселәрҙең күп булыуы кәрәк, әммә улар бик аҙ ғына булып, уның ғаиләһен генә хеҙмәтләндерә; быңдай ғәҙәттән тыш осраҡтарҙа хеҙмәтселәр штатын күбәйтеү маҡсатында хәрби хеҙмәткә алынғанға тиклем ошондай тәжрибәһе булған батальон һалдаттары йәлеп ителә. Фрак кейгән һалдаттар лакейҙарҙы алыштыра. Ҡайһы саҡта улар Обручевта оҙайлы ваҡыт дауамында алмашһыҙ эшләй. Раштыуа һәм Пасха байрамдарында хеҙмәтселәргә бүләкләү ғәҙәти хәл булғас, Обручев уларҙың барыһын да йыйып ала һәм һәр береһенә ҡағыҙға төрөлгән, 1 һумдан 3 һумға тиклем аҡса бирә, ошо аҡсаға аҡ бирсәткәләр һатып алыуҙы талап итә, һуңынан улары ошо аҡсаларҙы эскегә тотмағандарын раҫларға тейеш була.

Ошолар хаҡында миңә Обручевҡа барыһынан да яҡынараҡ тороп, уның ғаиләһендә урынлаштырылған тәртиптәрҙе яҡшы белгән канцелярия башлығы Смольянинов һөйләне. Отделение начальнигы булғанында шул уҡ Смольяниновты һәм ғәскәр старшинаһы Петр Иванович Коринды Обручев үҙе менән Петербургҡа алып бара. Улар, үҙҙәренең шәхси аҡсалары бик сикләнгән булғанлыҡтан, Обручевтың ҡаҙнанан юлға тип алған экстраординар суммаларына иҫән тота. Ҡунаҡханала бүлмә һәм төшкө аш генерал менән уртаҡ була, әммә киске аш һәм сәй биреү ҡаралмай. Ресторан хужаһы уларҙы бер нисек тә тартынмаҫҡа өгөтләй, генерал үҙе түләйәсәк, һеҙгә бер ни ҙә булмаҫ, тип ышандыра. Улар ҡайтып киткәнсе һәр көндә киске аш һәм сәй ваҡытында бирелеп тора. Иҫәп-хисап ҡағыҙы бирелгәс, Обручев ҡунаҡхананы тотоусыға ҡысҡырына башлай. Уныһы, ҡунаҡханала тукталыусы юғары дәрәжәле кешеләрҙең үҙҙәренең чиновниктары өсөн һәр саҡта ла түләүҙәрен белгәнгә күрә, генерал алдан үҙе бер ни ҙә әйтмәгәс, барыһына ла иртәнге, киске аш һәм сәй биреүҙе ҡушыуы хаҡында белдерә. Чиновниктар, үҙ сиратында, быны генералдың ҡушыуы буйынса эшләнгән икән тип уйлауҙары хаҡында әйтә. Обручев талап ителгән аҡсаны түләй, әммә аҙаҡтан уларҙың Питерҙа уның иҫәбенә хужаларса ҡыланыуҙары хаҡында оҙаҡ ваҡыт иҫтәренә төшөрөп тора.

Уның канцелярияһының тәүге башлығы Лебедев та, ошо уҡ вазифа вәғәҙә ителеп, Перовский килтергән кешеләрҙең береһе була, әммә ул был урынға тәғәйенләнмәй ҡала, сөнки Перовский унан талантлыраҡ һәм төбәктә яҡшы белгән Аким Иванович Середаны һайлай. Ул саҡта Лебедев канцелярия башлығы кимәлендәге хаҡ менән канцелярия секретары вазифаһында эшкә ҡалырға ризалаша. Ул рухани званиеһындағы заттарҙан булып, духовный семинария тамамлай; үҙенең тыуған яғында Воронеж губернаторы канцелярияһы башлығы була, һуңынан Петербургта хеҙмәт итә, ошо урынынан Ырымбурға саҡырыла.

Лебедевтың ныҡ һәләтле булыуы һәм хеҙмәт итеү осоронда алған ғәмәли белемдәре уға канцелярияла эшләгән сағында Обручевты уңышлыһыҙ сараларҙан ҡурсалау мөмкинлеген бирә. Ул Обручевтың, ниндәйҙер бер маҡсат менән мауығып китеп, эште үҙе теләгәнсә башҡарырға теләүен күреп, ошолай эшләүҙең унайһыҙ булыуы, законға тап килмәүе хаҡында иҫкәртеп тора. Обручев үҙененкен итергә тырыша. Лебедев уның бойороғон үтәй, әммә һуңынан иң юғары начальство ошолай итеп эш итеүҙең дөрөҫ булмауын аңлатырға мәжбүр була.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Берлин алынғас, 1-се Украин фронтының уң ҡанаты ғәскәрҙәренә Чехословакияны ахырынаса азат итеү бурысы йөкмәтелә. 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәре көнбайышҡа табан хәрәкәт итә. 7 майға улар, киң фронт менән һөжүм итеп, Эльба йылғаһына тиклем булған арауыҡты фашистарҙан таҙарта. 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре Германияның төньяҡ диңгеҙ ярҙары буйлап Англия ғәскәрҙәре биләгән ерҙәргә тиклем барып етә.

Советтар Союзының Юғары Баш Командованиеһы фашист армияһының бер һүҙһеҙ капитуляцияһы тураһындағы актты Германияның баш ҡалаһы Берлинда раҫлау тураһында тәҡдим индерә. Союздаш илдәрҙең Юғары командованиелары был тәҡдимде ҡабул итә. 8 майҙа союздаш илдәр армияларының вәкилдәре Берлин янындағы Карлхорст биҫтәһендә осраша. Совет Армияһы вәкәләтлеге Советтар Союзы маршалы Г. К. Жуковҡа тапшырыла, Бөйөк Британия армияһы исеменән авиация баш маршалы А. Теддерға, АҠШ ғәскәрҙәренән - генерал К. Спаатсҡа, Францианан - баш командующий, генерал Ж. М. де Латтр де Тассиньиға ошондай уҡ вәкәләтлек бирелә. Бында шулай уҡ Германия вәкилдәре - фельдмаршал В. Кейтель, флот адмиралы Г. Фридебург һәм авиация генерал-полковнигы Г. Штумпф килтерелә. Шулай итеп Германияның бер һүҙһеҙ капитуляцияһы хаҡындағы тарихи Акт ҡабул ителә.

Фашист илбаҫарҙарына ҡаршы дүрт йылға яҡын барған ҡан ҡойошло һуғыш бына шулай тамамлана. СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән 9 май көнө Еңеү байрамы тип иғлан ителә. 1 миллион 82 мең совет яугиры 1945 йылдың 9 июнендә булдырылған "Берлинды алған өсөн" миҙалы менән бүләкләнә, Берлин операцияһында ҡатнашҡан 600-ҙән ашыу ҡаһарман яугирҙарға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Беҙҙең 16-сы гвардия атлылар дивизияһы 3 июндән 15 июлгә тиклем марш менән Германиянан Польша аша Брестҡа килеп етә. Яугирҙар 9 октябргә тиклем хәрби лагерҙа тора, унан һуң улар, тимер юлы эшелондарына тейәлеп, Кавказ аръяғы хәрби округына ебәрелә. Унда полктар барса аттарын һәм мөлкәтен башҡа хәрби частарға тапшыра. Быға тиклем демобилизацияланмаған яугирҙар 31-се гвардия механизациялаңған дивизияның шәхси составына ҡушыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

### Башҡорт ҡалаһы: ыңғай һәм кире фекерҙәр



2007 йылда Өфө-II ҡаласығының фәнни әһәмиәте буйынса эксперт советының ҡабул иткән резолюцияһынан өҙөмтәләр килтерәйек:

1) Өфө-II ҡаласығы уникаль археологик һәйкәл булып тора, уның әһәмиәтен соҡор артындағы ҡәберлек тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә, был факт һәйкәлде Көнсығыш Европалағы шуға оҡшаш һәйкәлдәр араһында айырып тора.

2) Ҡаҙыныу һөҙөмтәһендә асылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына ҡарай. Ҡаланың һаҡ өсөн тәғәйенләнгән диуары һәйкәл эшләгән осорҙоң иртә этабында төҙөлгән, алдан ҡуҙалланған проект буйынса күтәрелгән һәм үҙаллы үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булыуын раҫлай.

Шулай итеп, Эксперт советы ағзалары билдәләр комплексы буйынса беҙҙең эраның IV-XV-XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтендә шикләнмәй. Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.

Эксперт советы ағзалары: Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, профессор, ТР Фәндәр академияһының баш ғилми хеҙмәткәре Ф.Ш. Хузин (Ҡаҙан); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының Урта быуат археологияһы төркөмө мөдире, профессор, тарих фәндәре докторы И. Л. Кызласов (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Сүрия археология экспедицияһының начальник урынбаҫары, тарих фәндәре докторы Ш. Н. Әмиров (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының һаҡланыусы ҡаҙылмалар бүлегенең Мәскәү эргәһе экспедицияһы начальнигы урынбаҫары, археометаллургия буйынса халыҡ-ара төркөм ағзаһы, тарих фәндәре кандидаты И. А. Сапрыкина (Мәскәү).

Эксперт советының резолюцияһына Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры, академик Н. А. Макаров ҡултамғаһын һала. Йәғни илдең әйҙәүсе археологтары Өфө-II ҡаласығын донъя әһәмиәтендәге һәйкәл тип таный, ә Башҡортостандың ҡайһы бер тарихсылары - юҡ. Үҙегеҙ һығымта яһағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

**(Аҙағы).**

***✓ "Минең университетта ҙур аудитория алдында нисек лекция уҡығанды күргәнең булды бит, ана шундай сифаттарҙы һин дә үҙеңдә тәрбиәләргә тейешһең. Үҙеңә ышан, ныҡ баҫып тор, тамашасының йөрәгенә үтеп ин", - тип өйрәтте.***

**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Урал Мортазин Башҡорт дәүләт университетының математика факультетын тамамлай һәм хеҙмәт юлын фән өлкәһендә башлай. Ғалим булыр кешене беҙ күп йылдар инде бейеүсе, сәхнә йондоҙо тип беләбеҙ. Сибай дәүләт филармонияһының "Сибай", Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблдәрендә, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләй ул. 2004 йылда үткән беренсе "Салауат йыйыны"нда Салауат Юлаев ролен башҡара. Рәсәй кинотеатрҙары экрандарына быйыл 30 ғинуарҙа сыҡҡан "Уҫал ҡала" ("Злой город") фильмында массовкала ҡатнашып, ул үҙен ижадтың башҡа өлкәһендә лә һынап ҡарай.**

**▸ Урал Хайрулла улы, һеҙ - ҡала башҡорто. Өфөлә тыуып үҫкәнһегеҙ. Һеҙҙең атай-әсәйегеҙ заманында баш ҡалала милли мөхит бик тар була. Ошо йәһәттән бала сағығыҙ хәтерегеҙгә нисек уйылған?**

- Һүҙҙе атайымдан башлаһам, дөрөҫ булыр. Хәйрулла Хәбибулла улы Учалы районының бәләкәй генә Аҙнаш ауылында тыуған. Үҙ көсө, тәбиғәттән бирелгән һәләте менән күтәрелгән, физика-математика фәнгән ағайҙары үлеп торған, шуға аҡһаҡалдар Хәбибулла ҡартатайыма, малайға матур итеп Аллаһ ҡөҙрәте тейгән исем ҡушығыҙ, тигән. Хәйрулла исемен һайлағандар. Ҡартатайым улы алты айлыҡ саҡта үҙ теләге менән 112-се башҡорт атлы дивизияһына яҙылып, Шишмәлә әҙерлек үткәндән һуң, һуғышҡа китә. Кире әйләнеп ҡайтмай. Атайым, поезды Өфөгә уҡырға инергә барғанда (өсөнсө полкала ятып бара) тәүге тапҡыр күргән кеше, Мәскәүҙә аспирантурала уҡыуы, профессор булып

нынан. Тамырҙарын барлаһаң, ҡартатаһының нәҫелептәре Учалы тарафтарына, Комсомол ауылындағы Йәғәфәровтарға барып тоташа. Ул республиканы төҙөүҙә ҡатнаша. Аслыҡ йылында аҙыҡ-түлек комитеты начальнигы итеп Мәләүезгә ебәрелә. Буласаҡ кәләше уның ординарецы сифатында бергә һыбай йөрөй. Халыҡтан һүҙ теймәһен өсөн, түшен бәйләп, үҙен егет итеп күрһәтә. Мөхәббәттәре шулай ныҡ көслө булған.

Атайым менән әсәйем Мәскәүҙә уҡығанда танышалар.

**бейеүсе булып китәһегеҙ. Нисек улай килеп сыҡты?**

- Үрҙә әйтеп үтеүемсә, бейеүгә бала саҡтан ылыҡтым. Ә тәүләп сәхнә инләп һеңдерә баҫып бейеү теләге телевизорҙан һирәкләп булһа ла күрһәтелгән Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт бейеү ансамбленең концерттарын ҡарағанда тыуғандыр. Университетта уҡығанда вуздың "Ирәндек" ансамблендә шөғөлләндем. Тәүҙә уны Екатерина Николаевна Варламова етәкләне, өлкән курстарҙа коллективты Гөлназ Вәкил ҡыҙы Аҡназарова әйҙәп алып китте. Диплом алғас, Рәсәй фәндәр академияһы эргәһендәге Өфө ғилми үҙәктең социология һәм иҡтисад институтында тикшеренеүсе стажер булып эш башланым. Маҡсатым - диссертация яҙыу, фән юлынан китеү. Ул саҡта ла ансамблдә бейеп йөрөнөм. Тик,

**▸ Башҡорт бейеүенең асылы ниҙә?**

- Башҡорт бейеүен аңлар өсөн башҡорттоң кем икәнен белергә кәрәк. Ниндәй ул башҡорт, кем ул башҡорт - шуны тойоу мотлаҡ. Репетитор булараҡ бейеү өйрәткәндә балаларға, йәштәргә иң элек ошо серҙе асам. Башҡорт ул - күп ерле, шул ергә ныҡ баҫып тора, ике аяғында ышаныслы атлап йөрөй. Үҙ еренең хужаһы, ҡурҡыу белмәгән ғәйрәтле батыр ҙа. Ере киң, шуға уның бейеүе лә иркен. Ҡолас киреп, һеңдерә баҫып башҡаралар уны һәм шул рәүешле башҡорттоң холоҡ-фиғелен, тормош ҡанундарын асып һалалар. Кавказ халыҡтарынығы кеүек экспрессив, кискен хәрәкәтле түгел. Кавказда ерҙәр тау-таш араһыҡтарында ғына. Ошо тарлыҡ бейеүҙәрендә лә сағыла. Башҡорт тыпырҙауы

# ТАРИХЫБЫҘ ТӘРӘН,



дәре докторы, профессор булып киткән кеше ул. 2016 йылда 75 йәшендә арабыҙҙан китте.

Беҙҙең йортта гел башҡорт мөхите хөкөм һөрҙө, шуға был йәһәттән кәмһенеү кисермәй үҫтем. Мин бәләкәй саҡта Башҡорт дәүләт университетының 4-се ятағында йәшәнек. Атайым менән әсәйемдең аралашҡан дуҫтары милләттәштәребеҙ булды, йыш ҡына ҡунаҡҡа йөрөштөләр, күмәкләп халыҡ йырҙарын башҡарырҙар ине. Атайым оҫта итеп бейей ҙә торғайны. Был һәләт минә унан күскәндер. Хәҙерге Мостай Кәрим урамындағы космонавт Владимир Комаров исемендәге Пионерҙар һарайына бейеү түңәрәгенә йөрөнөм, "Әкиәт" тигән ансамблдә шөғөлләндем. Уҡытыусыларым Эльза һәм Тәлғәт Урмановтар, Әлфирә менән Әхәт Фәсхетдиновтар булды. Уларға мәңгелек рәхмәтлемен.

Аҙнашта хәҙер биш кенә өй ҡалған. Атайымдың тыуған йорт нигеҙен беләм, йыш барып йөрөйөм. Ауыл матур урында, Уй йылғаһы буйында урынлашҡан. Күршелә - Ҡужай менән Шәрип ауылдары. Пугачев ихтилалына тиклем минең атабабаларым хәҙерге Силәбе өлкәһенә ҡараған Һатҡы буйында йәшәгән. Ул - беҙҙең ҡыуаҡан ырыуының аҫаба ерҙәре. Карателдар ҡыҫырыҡлап сығарғас, барын-табындарға килеп һыйынғандар, ерҙе соҡоп эшләнгән өйҙәрҙә йыл-йыл ярым тирәһе йәшәгәндәр. Ул урындар ҙа билдәле. Күскенселәрҙең ыҙа сигеүен күреп, Ҡужай халҡы, йыйын йыйып, аҡһаҡалдар һүҙен тыңлап, улар беҙҙең ҡәрҙәштәр бит, ауыл булып йәшәп китһендәр, тип ырыу еренән урын бүлергә ҡарар итә. Шулай Аҙнаш менән Шәрип барлыҡҡа килә. Шәрип ауылы киң билдәле, сөнки унда Зәйнулла Рәсүлев ишан тыуған. Ул да ҡыуаҡан ырыуы зыялыһы.

Атайым ғаиләлә кинйә бала була. Уға тиклем донъяға кил-

Ғәскәров ансамблендә бейеһәң ине, тигән бала саҡ хыялым, үҙ юлымды эҙләүем тынғы бирмәне. Ғәскәров ансамблендә, 24 йәштә генә булһам да, "Һин ҡарт инде", тинеләр.

Сибайға юлландым. Унда 1994 йылда филармония асылғайны. Бер йыл ғына үткән, башҡорт мөхитендә төҙөлгән йәш коллективтың иң һыҙғанып эшләгән, яңы формалашҡан саҡы. Азамат менән Нәсимә Тимеровтар, Лилиә Ишемйәрова, Сәғиҙулла Байегет, Сулпан Аҫҡарова, Айтуған Дәүләткирәев, Азат Нәбиуллиндар араһына инеп киттем. Атайым бик үк риза булмаһа ла, сәхнәләге уңыштарыма ҡыуана ине. Йылдар үткәс, Өфө филармонияһында яңғыҙ бейеүҙәремдән торған исем концертымды ҡарағас: "Улым, афарин! Үҙеңдең хыялыңды тормошҡа ашырҙың", - тип ихлас ҡулымды ҡыҫты. Ансамбель менән күмәк бейеү матур ул, ә яңғыҙың сәхнәгә сығыуы ҡатмарлыраҡ, тиер ине ул

(дробь) - ул бит ат сабыуы ритмы. Халыҡтың атҡа булған мөнәсәбәте шулай бейеүҙә лә сағыла. Меңге ат башҡорттоң айырылмаҫ дуҫы булған.

**▸ Бейеүсенең сәхнәләге ижади ғүмере ҡыҫҡа. Бөгөн ни менән мәшғүлһегеҙ? "Мәргән уҡсы"лар хәрәкәтенә нисек ҡушылып киттегеҙ?**

- Эйе, бейеүселәр хаҡлы ялға иртәрәк сыға. 2001-2006 йылдарҙа минә Ғәскәров ансамблендә бейеү бәхете яҙҙы. Артабан Өфө филармонияһында эшләнем. 2013 йылда Фәйзи Ғәскәров ансамбленең ул саҡтағы художество етәксеһе Филюс Хәсән улы Ҡаҙаҡбаев "Коллективҡа кире ҡайт, йәштәргә башҡорт бейеүҙәрен өйрәтеүсе остаз булырһың", тип саҡырып алды. Ветеран кешене һаҡларға тырышһалар ҙа, көн дә сәхнәгә сығыу ауыр бирелдә. Йәшәлгән йылдар үҙенекен ала, бер төн эсендә организм көс йыйып өлгөрмәй. Халыҡ алдына сығып

***Башҡорт бейеүен аңлар өсөн башҡорттоң кем икәнен белергә кәрәк. Ниндәй ул башҡорт, кем ул башҡорт - шуны тойоу мотлаҡ. Башҡорт ул - күп ерле, шул ергә ныҡ баҫып тора, ике аяғында ышаныслы атлап йөрөй. Үҙ еренең хужаһы, ҡурҡыу белмәгән ғәйрәтле батыр ҙа. Ере киң, шуға уның бейеүе лә иркен. Ҡолас киреп, һеңдерә баҫып башҡаралар уны һәм шул рәүешле башҡорттоң холоҡ-фиғелен, тормош ҡанундарын асып һалалар. Башҡорт тыпырҙауы (дробь) - ул бит ат сабыуы ритмы. Халыҡтың атҡа булған мөнәсәбәте шулай бейеүҙә лә сағыла. Меңге ат башҡорттоң айырылмаҫ дуҫы булған.***

китеүе менән ғорурланһа ла, тормошта бик ябай ине. Башҡортостанға һөйөүе сикһеҙ булды. Аспирантурала ғилми етәксеһе йәһүд Марк Наймарк: "Хәйрулла, һинең математика өлкәһендә иң юғары үрҙәрҙә яуларлыҡ, донъя кимәлендә күтәрелерлек һәләтең бар, Мәскәүҙә ҡал. Беҙ һиңә фатир алып бирербеҙ, эшләрһең, фән менән шөғөлләнерһең", - ти. Тик атайым, мин Башҡортостанға ҡайтып йәшәргә тейешмен, тип был тәҡдимдән баш тарта. Әгәр ул икенсерәк хәл итһә, бәлки, мин дә тыумаҫ инем, тыуһам да, асылым башҡа булыр ине, моғайын.

Әсәйем Фәниә Һиҙиәт ҡыҙы сығышы менән Мәләүез районынан.

Туйҙары 1971 йылдың 4 ғинуарында Мәләүеҙҙә үтә. ЗАГС-ҡа ҡыҙыл таҫмалар менән биҙәлгән кашауай санаға егелгән ат менән баралар. Бик матур күренеш, шулай бит. Әсәйем Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Өфө балалар йортонда логопед булып эшләп хаҡлы ялға сыҡты. Хәҙер уға 77 йәш инде.

**▸ Башҡорт дәүләт университетының математика факультетын тамамлайһығыҙ һәм...**

гел. "Минең университетта ҙур аудитория алдында нисек лекция уҡығанды күргәнең булды бит, ана шундай сифаттарҙы һин дә үҙеңдә тәрбиәләргә тейешһең. Үҙеңә ышан, ҡаушама, ныҡ баҫып тор, тамашасының йөрәгенә үтеп ин", - тип өйрәтте. Ысынлап та, атайым, кем менән һөйләшһә лә, тел аша уның аңына, йөрәгенә юл һала торғайны. Академик-профессорҙар менән дә, ябай кешеләр менән дә уртаҡ тел тапты ул.

баҫһаң, дәрт уяна, нисектер хәл килеп керә ул, тик быуындарҙың һыҙлауын ҡайҙа ҡуяһың. Үҙеккә үткәрәләр. Табиптар менән кәңәшләшеп ҡараным, үҙеңдән тора, әгәр ихтыяр көсөң етһә, бейе, тинеләр. Уйланым да, ҡуй, былай булмай, туҡтарға кәрәк, тигән һығымтаға килдем.

Әлеге ваҡытта сәхнәнән саҡ ҡына ситтәрәк торам. Өфө сәнғәт училищеһында математикадан уҡыттым да, 2023 йылдың октябрендә эштән сығып, "Уҫал

✓ *Ун дүрт йыл татар-монголдарҙы үҙ биләмәләренә индермәй алышҡан башҡорттар килешеү нигеҙендә Сыңғыҙ хан империяһына инә һәм артабан уның яулау походтарында ҡатнаша, Козельскты алыуҙа ла була ата-бабаларыбыҙ.*



ҡала" ("Злой город") фильмында дөйөм ролдәрҙә (массовкала) уйнаусыларға ҡушылып киттем.

Уҡ атыуға килгәндә иһә, уның тарихы былай. Бер төркөм уҡыусылар менән 20-се Башҡорт гимназияһында йога, физик күнекмәләр менән шөғөлләнә инек. Мин үҙем алып барҙым уны. Бер көндө гимназияға Азамат ағай Юлдашбаев килгән. Мине күреп: "Бында нимә эшләп йөрөйһең ул? - ти, аптырап. Шулай, шулай, тим. "Башҡорт йогаһын күргең киләме? 158-се Башҡорт гимназияһына кил, күрерһең", - тине усал ғына тәсә. Барҙым. Спортзалдан таптоп, тап-топ тигән тауыш килә. Инһәм, Азамат ағай, Юлай Ғәлиуллин, Артур Батыршин - тағы байтаҡ ҡына ир-егеттәр - уҡ ата. Шулай итеп, "Мәргән уҡсылар"ға ҡушылып киттем. Ярыштарға сыға башланыҡ. Ҙы ул. "Усал ҡала" кинопроектында ҡатнашыусы һеҙҙең элекке студентығыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Урал Мортазинға ятаҡтан урын биреүегеҙҙе һорайбыҙ, тигән үтенес менән мөрәжәғәт иттек. Хаттың ярҙамы тейҙе. Икенсе барыуыма бынан тағы егеттәр эйәрттем үҙем менән. Айтуған Дәүләткиреәв та барҙы.

Фильмда башҡорттар булһын, тип тырыштым үҙемсә. Сөнки уның нигеҙендә башҡорттар ҡатнашҡан тарихи ваҡиғалар ята. 1238 йылда Батый хан етәкселегендә татар-монгол ғәскәре рустарҙың Козельск ҡалаһын ҡамауға ала. Ҡаты алыш ике айға һуҙыла, ныҡ ҡаршылыҡҡа осрай дала һуғышсылары, мендәрсә яуғир башын һала. Дошман яуына Козельск халҡы ҡаһармандарса ҡаршы тора, ләкин ҡаланы яҡлап ҡала алмайҙар, ул яндырыла. Ун дүрт йыл икән, уларҙы йәлеп иттеләр. Монгол-татарҙарҙың ғәскәр башлыҡтарын яҡут артистары уйнаны. Батый ханды - Василий Борисов, Сүбиҙәйҙе - Герасим Васильев. Улар икеүһе лә - яҡут академтеатры артисы. Иң ҡиҫкен һуғыш күренештәрен башҡарған каскадерҙар араһында башҡорт Роберт Йылҡыбаев булды. Ул Мәскәүҙә эшләй һәм йәшәй.

Тарихи ысынбарлыҡҡа тап килһен өсөн, фильм һыуыҡ осорҙа төшөрөлдө. Шарттар еңелдән булманы. Төнгө 1-ҙә торабыҙ, алдан һөйләшеп ҡуйылған Мәскәү метроһына ингән урындарҙың береһендә йыйылабыҙ һәм автобуста Тверь өлкәһенә юлланабыҙ. Таңғы бишенсе яртыла грим һала башлайҙар, костюм кейәһең. Шул тиклем артистарҙы, массовкаға йәлеп ителгән кешеләрҙе фильм төшөрөү майҙанына сығырға ҡалдырабыҙ, ғаиләлә тик үҙебеҙсә генә аралашабыҙ, тигән талап ҡуйҙы. "Мин русса ла, инглизсә лә, немецса ла беләм, әммә ләкин үҙ өйөмдә тик башҡортса һөйләшәм", - ти торғайны ул. Милли асыл мәсьәләһен һеңдергәнсә төшөндөрә белде. Ике улым да 20-се Башҡорт гимназияһында уҡый. Үҙем унда белем алмағанын өсөн атайәсәйемә үпкәм дә бар ине. Дуҫым Азат Мифтахов (шағир Риф Мифтаховтың улы) Мәскәүҙә криминалист булып эшләй, подполковник. Ул ғаиләһендә башҡорт мөхитен тота, ҡыҙы үҙ милләтенә кейәүгә сыҡты. Беҙ рәхәтләнеп оҙон-оҙаҡ итеп туған телдә телефондан һөйләшәбеҙ гел. Нәҡ шулай - башҡорт менән башҡорт тик башҡортса аралашырға тейеш.

**Лилиә Ишемйәрова менән һеҙ - ижади ғаилә, сәхнә кеКөттөрөп,** 2008 йылда улыбыҙ донъяға килде. "Әйткән һүҙ, атҡан уҡ, тиҙәр, Арыҫлан була инде", ти Лилиә. Мин уйға ҡалдым, ҡорҙаштар араһында Арыҫлан исемле малайҙар күбәйеп китте бит. Исемде лә һаҡларға, улымды уларҙан айырырға ла кәрәк ине. Ҡартатайым Ҡунаҡбаев фамилияһы менән йөрөгән. Әһә, "бай"ын алып, Арыҫланға ҡушырға була ла баһа, тигән уй килде. ЗАГСта, ундай исем буламы ни, тип, ышанмайынса, исемдәр китабынан тикшереп ҡаранылар. Шулай итеп, өлкән улыма Арыҫланбай тип ҡуштыҡ. Ә кесеһен тәүҙә Морат тип уйлағайныҡ, тукта әле, мәйтәм, ағаһына иш булып (аралары бер йәш тә өс ай ғына) тыуҙы ла баһа, Ишморат булһын, тинек. Эйе, балаларыбыҙ исемендә мәғәнә лә, ғаилә тарихы ла ята.

# УНЫ БАШҠАЛАР ҘА БЕЛҺЕН...

Ярайһы ғына оҫтарҙым, башҡаларҙы өйрәтә башланым. Шунда күрәм, минән өйрәнгәндәр һөҙөмтәлерәк ата. Тренер урынында үҙемде ышаныслыраҡ тоям, шуға ярышып сәпкә атыуҙан тыйылам хәҙер. Ул саҡтағы Өфөнөң Совет районы хакимиәте башлығы Урал Килсенбаев ярҙамында "Глобус" балалар ижад үҙәгендә уҡ атыу буйынса "Төньяҡ амурҙары" клубын астыҡ. Унда биш йылдан ашыу эшләп алдым.

**"Мәргән уҡсы"лар ни кимәлдәлер ата-бабаларыбыҙҙың һуғышсан асылын, халҡыбыҙҙың данлы ла, шанлы ла үткәнен тергеҙә. Был эшмәкәрлегегеҙҙең әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?**

- Башҡа халыҡтар илен баҫмағанбыҙ, әммә ләкин ата-бабаларыбыҙға өҙлөкһеҙ көрәшергә, еребеҙҙе яҡларға тура килгән. Уҡ-һаҙаҡ уларҙың төп ҡоралы булған. Ғөмүмән, уҡ атыу (традицион уҡ, тибеҙ) фәҡәт милли кейемдә башҡарыла, йәғни кеше бер мәлгә булһа ла тарих эсенә инеп китә. Бөгөнгө глобаллашеү заманында боронғоға ҡайтып әйләнеү бик мөһим.

**Ошо мауығыуығыҙ һеҙҙе 2023 йылдың көҙөндә төшөрөлә башлаған "Усал ҡала" ("Злой город") фильмы киномайҙанына алып килде. Был проектҡа нисек эләктегеҙ?**

- Юлай Ғәлиуллинды бит бөтә Рәсәйҙә беләләр, саҡырыу уға килә тәүҙә. Үҙе бара алмаһа ла, мәғлүмәтте беҙгә еткерҙе. Кастинг үткәреп, милли кейемдә атта һыбай йөрөү, уҡ атыу һәләтемде баһаланылар башта. Тәүге мәртәбә Мәскәүгә барып ҡайтыуым уңышлы булды. Тик фатир мәсьәләһен хәл итергә кәрәк ине. Төрлө юлдарын уйлап ҡараным да, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосоповҡа мөрәжәғәт иттем. Үҙем хореографияға уҡыған Мәскәү мәҙәниәт һәм сәнғәт университеты ректорына хат яҙтатар-монголдарҙы үҙ биләмәләренә индермәй алышҡан башҡорттар килешеү нигеҙендә Сыңғыҙ хан империяһына инә һәм артабан уның яулау походтарында ҡатнаша, Козельскты алыуҙа ла була беҙҙең ата-бабаларыбыҙ.

**Фильмдың фабулаһына ярашлы, һеҙ ҡара көстәр яғында уйнанығыҙ. Ошо йәһәттән эске бер антогонизм тойманығыҙмы?**

- Мин киноға төшөргә барҙым. Шул ғына. Ролгә инәһең дә китәһең бит ул, башҡа төрлө уйға урын ҡалмай башыңда. Ҙур фильмдың эшләнеүен эстән күрергә ине, тигән хыял йөрөттөм күңелемдә. Барҙым, күрҙем, ҡатнашып йөрөнөм. Шуның менән ҡәнәғәтмен. Йырҙың һүҙҙәрен алып ташлап булмай, тигән кеүек, үрҙә әйтеүемсә, Козельскты яулауҙа башҡорттар ҡатнашҡан һәм был - тарихи факт. Тимәк, "Усал ҡала"ла массовкала уйнауыбыҙҙа бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ.

Ике ай барҙы фильмды төшөрөү. Тверь өлкәһендә ағастан ысын ҡала төҙөп ултырттандар. Уны күреп һушың китте - 12 метр бейеклектәге бүрәнә диуар күтәрелгән, уратаһына биш метр киңлектәге канау ҡаҙылған. Ҡарағасты Корелиянан алып килгәндәр тинеләр. Етеһигеҙ ысын монгол тирмәһе ултыртҡандар, эсен тейешенсә йыһазлағандар. Ә ул тиклем кешене ул замандағы хәрби кейемгә кейендереү һәм ҡораллandырыу өсөн, ай-бай, күп аҡса киткәндер! Әгәр ысын булһа, фильмды төшөрөүҙең бер көнө 12-13 миллион һумға төшкән.

Массовкала иң күбе ҡалмыҡтар булды. Атта һыбай йөрөгән, беҙҙең "Мәргән уҡсы"ла шөғөлләнгән егеттәр кеүек уҡ-һаҙаҡ тота белгәндәргә оран ташлағандар ҙа, йыйылып килгәндәр. Хаҡастар, тувиндар, яҡуттар булды. Монголдар үҙҙәре лә ҡатнашты. Мәскәүҙә Хәрби академияла Монголиянан бер төркөм офицер уҡып ятҡан әҙерләү - иҫ киткес ҙур хеҙмәт! Кино ҡараусы уны күрмәй ҙә, белмәй ҙә. Аҫтынан ҡалын кейенһәң дә, тимер кальчуғаның һыуығы тәнгә үтеп инә, аяҡтағы күн итектәр үғешләнә, ашау насар булмаһа ла, көнө буйы асыҡ һауала йөрөгән ирҙәргә энергия етмәй, урыҡ-һурыҡ йоҡлау - былар барыһы ла йонсота, кәйефтә сағыла. Шулай бер көн нығытма эсендә ут тирәләй йылынып ултырабыҙ. Күрәм, егеттәрҙең бөтөнләй танауҙары төшкән. Мәйтәм, ҡана, ҡалмыҡ көйөн ҡуйығыҙ әле. Музыка яңғырауы менән, бейеүгә төшөп киттем. Ҡара һин уны, башҡорт ҡалмыҡса бейей, тегеләр ҙә сәмләнеп китеп минә ҡушылды. Шундай хәл дә булды. Аҙаҡтан бейеүемде ҡалмыҡ егеттәре интернетҡа ҡуйған, ул бик күп лайыҡтар йыйҙы.

**"Телебеҙ бөтә, тип ҡысҡырмайыҡ, бөтмәй ул", тигәйнегеҙ бер интервьюғыҙҙа. Бындай ышаныс ҡайҙан килә?**

- Тел бөтә, тип ҡурҡыу йәмәғәтселектә, эйе, бар. Ышанам, телебеҙ бөтмәйәсәк. Был проблеманы глобаль масштабта түгел, ә иң элек һәр кем үҙ ғаиләһендә хәл итергә тейеш. Шул ғына, башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Һәр ғаилә башлығы, әйтәйек, Урал Мортазин, Азамат Тимеров, Сәғиҙулла Байегет, Айтуған Дәүләткиреәв үҙҙәренең балаларын ошо юҫыҡта дөрөҫ тәрбиәләнә, телебеҙ йәшәйәсәк. Мин үҙем Өфөлә тыуып үҫтем, рус мәктәбендә уҡыным. Туған телемде икмәк-тоҙлоҡ ҡына белеп ҡалмайым, ә башҡортса фекерләй ҙә алам. Был йәһәттән атай-әсәйемә рәхмәтлемен. Атайым, тупһаны ашаҡлап, өйгә инһәң, сикте үткән һымаҡ, урыҫ телен теге яҡта шеләре. Ә балаларығыҙ ниндәй юл һайлаған?

- Зөлхизә ҡыҙым кейәүгә Урал менән Мәскәүҙә йәшәй. Аҙаш кейәүем бар шулай. Ҡоҙағыйым Гөлсөм Ғәлимйән ҡыҙы 20-се Башҡорт гимназияһында Зөлхизәнең класс етәксеһе булды. Тормош шулай ҡыҙыҡ бит ул. Бер йәшлек ейәнебеҙ Тамирландың үҙләштергән яңынанъяны "һөнәрҙәренә" ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Ҡыҙым, миңә оҡшап, үҙен оҙаҡ эҙләне. Үҙаллы әҙерләнеп, яңынан Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырып, әле, 27 йәшендә, Мәскәүҙә лингвистика университетында уҡып йөрөй. Немец, инглиз телдәрен, психологияны өйрәнә. Арыҫланбай менән Ишморат улдарым мәктәп уҡыусылары әле. Кем булып китерҙәр, аныҡ ҡына әйтеүе ауыр. Үҙҙәрен тапһындар был тормошта - Лилиә менән миней теләгебеҙ шул ғына. Әлбиттә, бурысыбыҙ - дөрөҫ йүнәлеш биреү, төрлө яҡлап үҫешһендәр өсөн бөтә шарттар ҙа булдырыу. Бөгөнгө көндә уландарым тхэквондо менән уңышлы шөғөлләнә, тренер ярҙамсыһы булып йөрөйҙәр, кескәйҙәргә был алыш төрөнөң нескәлектәрен асырға бурыслыҡ итәләр. Бала шулай һәр яҡлап үҫешергә тейеш.

**Балаға исем һайлау ҙа үтә яуаплы бурыс. Йәш атаәсәләр йыш ҡына был йәһәттән уйлап еткермәй, улар өсөн яңғырауыҡлы һәм ҡыҫҡа булһа, матурыраҡ, яҡшыраҡ һымаҡ. Һеҙ иһә балаларығыҙға исемде үҙебеҙсә ҡушҡанһығыҙ...**

- Тәүге балабыҙға исем һайлағанда, бәхәс тыуманын өсөн, Лилиә менән шулай килештек: малай булһа - Арыҫлан, ҡыҙ икән, Зөлхизә тип ҡушабыҙ тип.

**Гәзит уҡыусыларға әйтер һүҙегеҙ...**

- Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, башҡортлоҡто онотмайыҡ. Мин үҙем, мәҫәлән, "Усал ҡала" фильмында төштөм һәм мәле сыҡҡанда халҡыбыҙ, тарихыбыҙ тураһында һөйләп йөрөнөм. Ситтә беҙҙе аҙ беләләр нишләптер. Китсе, Батый ғәскәрендә башҡорттар ҙа булғанмы, тип бот сабалар. "Милләтең ҡалмыҡмы, ҡаҙаҡмы?" - тип тә ҡыҙыҡһыныусылар булды. Яуапты ишеткәс, "Ә башҡорттар кемдәр ул?" тигән һорау бирәләр. Һөйләй башлаһаң, аптырайҙар, Рәсәйҙә монгол-татарҙарға баш һалмаған берҙән-бер халыҡ икәнебеҙҙе белгәс, һоҡланалар. Бөгөнгө глобаллашеү заманында беҙгә үҙ урыныбыҙҙы табыу мотлаҡ, көсөнән килгәнсе һәр кем телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлауға, милли ҡиммәттәребеҙҙе юғалтмауға үҙ өлөшөн индерергә бурыслы. Һан яғынан үҫергә тейешбеҙ. Ауылда ғына түгел, ә ҡалаларҙа ла. Өфөлә өс бала үҫтереү, айһай, ауырҙыр, тиҙәр, баш сайҡап. Һис тә ауыр түгел, ғаилә ишле булған һайын, үҙенде яуаплыраҡ тояһың, ҡайҙандыр көс-ғәйрәт тә табыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Урал Мортазин менән әңгәмәнән шундай һығымта: "Тарихыбыҙҙы беләйек, уны башҡаларға танытайыҡ, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлайыҡ, үҫтерәйек, ишле балалар тәрбиәләйек. Бының өсөн заман менән бергә атлайыҡ, зарланмайыҡ, ә төрлө өлкәләрҙә уңыш ҡаҙаныу юлдарын эҙләйек һәм быға өлгәшәйек".**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Йоҡоға талған хәтеребеҙ ҡайсаҡ уяна ла түҙеп торғоһоҙ рәүештә намыҫыбыҙҙы ғазаплай башлай. Беҙ уны тиҙерәк кире йоҡлатырға ашығабыҙ. Бының өсөн бөтә шарттарҙы булдырғанбыҙ...*



Һуғыш күп ҡорбандар талап итә. Иң аҫылдар, иң батырҙар арабыҙҙан китте, һәр яуҙан һуң беҙҙең үсеш оҙаҡ йылдарға туҡталды, тормош гел артҡа тәгәрәне. Ҡалаларыбыҙ, ауылдарыбыҙ бушаны. Бушаған урындарға ҡунаҡтар өҫтәлде. Яңынан аяҡҡа баҫыр өсөн ваҡыт кәрәк ине. Ә ваҡыт беҙҙең файҙаға булмай сыҡты... Ваҡытты бүтәндәр файҙаланды. Беҙ быны бик һуңлап аңланыҡ, сөнки тәү ҡарамаҡҡа илебеҙҙә яңы мөнәсәбәт барлыҡҡа килгәне һиҙелмәй ине. Ҡунаҡтарыбыҙ, элеккесә, беҙҙе йылмайып ҡаршыланы, элеккесә ихтирамын белдереп баш эйҙе.

Ә һуң үҙебеҙсе? Гәрәсәт ҡупҡанда гәйәт ҙур берҙәмлек һәм татыулыҡ күрһәткән халҡым тыныс тормошҡа ҡайтыу менән самаһыҙ гәмһеҙ һәм бошмаҫҡа әйләнә ине. Енеү байрамдары көндәр түгел, айҙарға һуҙыла, бындай мәлдәрҙә ил хәстәрлеге артҡараҡ күсә. Уҙара тартҡылашыу, элекке үпкәләрҙе иҫкә төшөрөү... Иртәгәһен ҡайғыртыр ил ағалары дан йырлауға иреп, самаһыҙ хушкүңеллегә әүерелә... Ватан, халыҡ яҙмышы тураһында уйланыу бер генә миҙгелгә лә туҡталырға тейеш түгел! Бүтәнсә - һәләкәт.

Һуңғы алыштарҙың береһе бик ҡаты барҙы. Бихисап батырҙарыбыҙ ҡорбан булды. Беҙ йәшәү менән үлем араһында ҡалдыҡ, һәм шул саҡта ҡунаҡтарыбыҙға ярҙам һорап мөрәжәғәт иттек. Беләһеңме, ниндәй яуап алдыҡ?

- Беҙ ҡунаҡ түгел! Беҙ төп халыҡ! Беҙ был ерҙең ысын хужаһы!

Беҙ ҡабатлап һорарға мәжбүр булдыҡ.

- Беҙ ҡунаҡ түгел! Бөтән килеш үҙегеҙҙе хужа итеп һанайһығыҙмы? Беҙ күп, тимәк, беҙ хужа! Һеҙ беҙгә бары буйһонорға тейеш! Етте, күп түҙҙек. Йәшәгегеҙ килһә, беҙ һеҙҙе ил сиге һаҡсылары итеп ҡуябыҙ, бүтәненә өмөт итмәгеҙ!

Беҙҙең нәфрәт ташып сыҡҡас, улар ҡурҡып шулай тине:

- Нинә ысынбарлыҡ менән иҫәпләшергә теләмәйһегеҙ?

Беҙ, аңыбыҙға килеп, тирәйүнгә күҙ һалдыҡ. Урманяландарыбыҙ улар ҡулында, ҡала-ауылдарыбыҙ тулы улар. Унда йәшәгән халҡыбыҙ ҡайҙа?

- Беҙ уларҙы әкренләп йоттоҡ. Был өлкәлә тәжрибәбеҙ ҙур. Һеҙ йәшәргә теләп, үҙегеҙсә көрәштегеҙ, ә беҙ - үҙебеҙсә. Тормош ҡануны шулай: кемдер ота, кемдер отола. Хәҙер беҙ күпселек. Кем күп, шул идара итергә тейеш. Был донъяла хәйлә һәм файҙа ғына бар. Тыуған ер, ватан тигән төшөнсә юҡ ул, бөтәһе лә үҙгәреүсән... Һеҙ ҙә, иҫән ҡалғандар, бөгөндән үҙгәрергә тейеш. Беҙ ҡоралһыҙ, ҡоралһыҙға кем ҡул күтәрер?

Ысынлап та, ирмен тигән ир ҡоралһыҙға ҡул күтәрерме? Һәм уларға беҙ үҙебеҙ үк ошонда йәшәргә фатиха бирмәнекме? Ҡанһыраған, хәлһеҙләнгән халыҡ был осраҡта нимә эшләй ала? Беҙ ҡапҡанға эләккән йәнлек хәлендә инек... Был афәтҡа ҡаршы көрәшә белмәй инек. Ниҙер эшләр, уйлар өсөн ваҡыт кәрәк, ә ваҡыт беҙгә ҡаршы эшләй! Шул саҡ ҡасандыр ата-бабаларыбыҙ һалған таш ҡәлғәне иҫебеҙгә төшөрҙөк. Бер аҙ ғына көс йыйғансы, был һәләкәткә ҡаршы торорға өйрәнгәнсе тип, таш ҡәлғәгә инеп бикләндек... Ләкин... тора-бара был таш ҡапсыҡ күптәрҙең күңеленә, шул иҫәптән Алып батырҙың күңеленә, хуш килде. Тышҡы донъянан бикләнеү - күп мәсьәләләрҙән, ауырлыҡтарҙан ҡасыу ул, ә аҙағы - гәмһеҙлек, яңҡаулыҡ һәм һаман түбән тәгәрәү... Күпселек ҡәлғәнән сығырға ашыҡмай.




- Нишләп?.. - Мин үҙем дә һиҙмәйенсә ярһып ҡысҡырҙым. Таштарға ҡаҡлығып, таныш тауышым әллә ҡайҙарға яңғыраны: "Ә-ә... ә..."

- Ҡараһаҡал! Тарих ике тапҡыр ҡабатланмай бит!..

Ҡараһаҡал яуап бирергә ашыҡмай, ә минең, нинәлер, теҙ быуындарым ҡалтырай, күңелем түҙеп торғоһоҙ рәүештә үҙ ваҡытыма, үҙ илемә саҡыра.

- Ни өсөн ошондай үкенесле хаталар... - Мин әйтеп бөтмәйенсә тотлоғам.

- Нинә улай тиһең әле? - Ҡараһаҡал тауышында мин хәүеф, борсолоу тоям. - Нинә?

"Нинә? Нинә? Нинә-ә-ә?.." Таш ҡәлғә яңғырауы был һорауҙы әллә мең мәртәбә ҡабатланы. Мәңгелеккә иҫтәлек итеп һалынған ҡәлғә үҙ-үҙенә бирә ине, ахырыны, был һорауҙы, һәм яуап таба алмайынса, йәнә гөүләп үкһене: "Нинә-ә-ә..."

- Һәр халыҡтың үҙ тәҡдирелер. Халыҡтарҙың ер йөҙөнә килеп-китеүенең үҙ ваҡытылыр. Шул мәлдә ул тотҡарлай ҙа, ашыҡтыра ла алмайҙыр.

- Рух - үлемһеҙ!

- Рухты ҡотҡарырға кәрәк. Һин таш ҡәлғәләге халҡымды күрҙең инде. Таш ҡәлғә беҙҙең йәшәү рәүешен, ғөрөф-ғәҙәтебеҙҙе, донъяға ҡарашыбыҙҙы, иманыбыҙҙы үҙгәртте. Беҙ, үҙебеҙ ҙә һиҙмәйенсә, бөтөнләй икенсе кешегә әүерелдек. Йоҡоға талған хәтеребеҙ ҡайсаҡ уяна ла түҙеп торғоһоҙ рәүештә намыҫыбыҙҙы ғазаплай башлай. Беҙ уны тиҙерәк кире йоҡлатырға ашығабыҙ. Бының өсөн бөтә шарттарҙы булдырғанбыҙ - кәңәштәр берлеге тип аталған шау-шыулы табын, йылға булып аҡҡан араҡы, бер-беребеҙгә дан йырлау, яңы Алла...

Ҡасандыр ирек һөйгән ғорур халҡым азатлыкты күрә алмаҫ булды. Ил азаматтарының айы-рылмаҫ юлдашы ат булған, ә таш ҡәлғә үҙ талаптарын ҡуйҙы. Был талаптарға иң әрһеҙ, бысраҡ һөйөр хайуан - сусҡа ғына бирешмәне. Ҡасандыр ат башын данлаһалар, беҙ хәҙер сусҡа башын ҡосабыҙ...

- Ә һин? Һинсе, Ҡараһаҡал?

- Беҙҙең цивилизация, үҙ балҡышын тамамлап, инде офоҡҡа табан бороддо. Сәғәте һуғыу менән ул һүнәсәк. Үҙебеҙгә күрһәтелгән юлдың ахырына тайпылышһыҙ яҡынлашабыҙ. Юҡҡа сыҡҡан цивилизация урынына яңыһы ҡалҡыр. Һәм мәңгегә шулай...

- Рух үлемһеҙ, Ҡараһаҡал!

- Мин һинһә үҙ яҙмышымды теләмәйем. Рухты ҡотҡарығыҙ!

Мин уны үҙем менән алып китер инем... Алып китеп, мин уға нимә вәғәҙә итә алам? Вәғәҙә иткән хәлдә лә, кешене тыуған иленән, улай ғына ла түгел - үҙ дәүеренән айырып алып китеү ҡәбәхәтлек һәм тәбиғәтҡә ҡаршы яһалған енәйәт түгелме?..

Минә ҡайтыу юлы бикләнһәсе? Был уйҙан тыным ҡыҫыла, һауа етешмәй башлай...

Ҡояш үҙ сағыулығын юғалтты, һиҙҙермәй генә энер төшә ине. Мин өҫкә ҡараным. Шул уҡ ҡояш... Мәңгелек ҡояш. Бөтәһенә лә шаһит ҡояш. Ҡаршы ал мине үҙ илемдә, үҙ дәүеремдә, үҙ цивилизациямда!

Алыҫта өйөрмә. Ашығырға кәрәк.

- Бир ҡулыңды, дуҫым!

Ниңәлер яуап юҡ. Ҙур, моңһоу күҙҙәрҙә ғазап, һәр замандың үҙ ҡанундары була. Мин ҡул бирешеүҙең нимә икәнен аңлатырға теләйем.

- Дуҫтар бер-береһенә терәк икәнен белдереп, бер-береңенә йөрәк йылыһы тапшырып, ҡул ҡыҫыша. Был кешеләрҙең бер-береһенә һүҙһеҙ генә белдергән ихтирам вә хөрмәте. Бир ҡулыңды, дуҫым!

Мин уның, һыҙланыуын йәшереп, ашыҡмай ғына әйткән яуабынан тертләнем.

- Мин ҡулһыҙ, мәһриман ҡунағым. Юҡ минең ҡулдар.

Шул саҡта ғына уның ни өсөн япма ябынып йөрөгәне аңыма барып етте.

- Мин ил батыры инем. Һәр саҡ ғәскәр башында барыр инем...

Мин ғәфү үтенеп тә, хушлашып та, башымды уның иңбашына терәйем.

- Рух үлемһеҙ! - ти ул. - Ә һин ашыҡ! Өйөрмә яҡынлаша. - Иңенә аҡ плащ һалған Ҡараһаҡал ҡуйыра барған болоттар, көсәйгән ел фонында ҡанаттарын йәйеп күкте айҡаған бөркөттө хәтерләтә ине.

Түбәнгә төшә-төшә йәнә өҫкә күтәрелеп ҡарайым. Таш ҡәлғә тәү күргәндәге мөһәбәтлеген юғалтҡан төҫлө. Хәҙер ул энер һарҡыуында ҡарайып күренә. Мин уға ҡурҡыу ҙа, йәлләү ҙә ҡатыш күҙ һалам. Оло ҡапҡа төбөндәге яҡты йондоҙҙо хәтерләткән аҡ һынға һуңғы тапҡыр ҡул болғайым, һуңғы тапҡыр...

* * *

Мин бөгөн иланым. Ни өсөн? Ҡайһы берәүҙәр тураһында ул ваҡытынан алда йә һуң тыуған тигәнде ишеткәнем бар. Нимәнән сығып шулай тип әйтәләр икән? Был - кешегә ҡот осҡос хөкөм ҡарары сығарыу түгелме?

Мин бөгөн үҙ цивилизациямда, үҙ дәүеремдә, үҙ ваҡытымда тыуғаныма ҡыуанып һәм үкенеп иланым. Мин уға кәрәк булғаным өсөн дә, кәрәкмәгәнлегем өсөн дә иланым.

Ҡыуаныс һәм көйөнөс йәштәре... йәнәш тама икән.

**(Аҙағы. Башы 8-9-сы һандарҙа).**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ҺӨҘӨМТӘЛЕ БУЛҺЫН ҺӨЙЛӘШЕҮ



**Ҡатын-ҡыҙҙың күңел донъяһы ҡырҡ яҡлы, ҡырҡ сыраҡлы, әгәр шуларҙың береһе һүнһә, ул икенсеһен, өсөнсөһөн ҡабыҙа, һәм үҙен генә түгел, башҡаларҙы ла яҡтырта, йылыта. Шуға ла эштә йөкмәтелгән бурыстарҙы башҡарыуҙан тыш, ғаиләлә хәстәрлекле әсәй, унған хужабикә, кәрәк саҡта психолог булырға ла, шул уҡ ваҡытта ҡул эштәре менән булышырға, баҡса үҫтерергә лә, юғары вазифалар биләп, йәмәғәт эшмәкәре булырға ла көс-дарманы етерлек беҙҙең гүзәл заттарыбыҙҙың. Ошо һыҙҙарға кеүәт булды ла инде Ейәнсура районы Кинйәбулат ауылында "Айыҡ ауыл" бәйгеһе сиктәрендә үткәрелгән "Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сыраға" тип аталған күркәм сара, унда ойошторолған түгәрәк.**

Сара төрлө һөнәр эйәләре, Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарҙың яҡындары, ағинәйҙәр ҡатнашлығында түңәрәк ҡор артында фекер алышыу форматында үтте. Ҡатын-ҡыҙҙар бөгөн көнүҙәк булған мәсьәләләрҙе күтәрҙе, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләне. Килен-ҡәйнә мөнәсәбәтенә лә, тәрбиә темаһына лә туҡталдылар. Ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлегенә ҡарата бик матур кәңәштәр бирелде. Ҡыҫҡаһы, аулаҡҡа йыйылып сер бүлешкәндәй итте ҡатын-ҡыҙҙар.

Әңгәмәгә Ейәнсура районы хакимиәте башлығы Дәмин Юланов, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байгускаров, Һүрәм ауыл биләмәһе башлығы Азамат Батыршин килеп ҡушылғас, гүзәл заттар етәксе, ғаилә башлығы, атай булараҡ, уларға ла һорауҙарын яуҙырҙы. Районда эш сәфәре менән булған Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, "Тамыр" балалар телевидениеһы етәксеһе Гөлназ Ҡолһаринаның да сараға ҡушылыуы унның мәртәбәһен тағы ла арттырҙы.

**Яҡынса б.э.т. 576 - 496 йылдарҙа йәшәгән Пифагор кем булған һуң? Уның исеме мәктәп фольклорына ла инеп киткән бит әле: "Пифагорҙыңыштаны барса яҡтан тип-тигеҙ" (бында һүҙ ике катеты тигеҙ булған тура мөйөшлө өсмөйөш өсөн $a^2 + b^2 = c^2$ формулаһын квадрат фигуралары төшөрөп иҫбатлау хаҡында бара). Тик шуныһы ҡыҙыҡтыр: б.э.т. Европа халыҡтары скифтар тегеп кейгән ыштан хаҡында бер ни ҙә белмәгән. Хәҙерге заманда уның исеме менән аталған теореманы урта мәктәптә уҡыған һәр бала белгән хәлдә лә, бынан 2 500 йылдар әүәлерәк йәшәгән бөйөк математик, барса йыһанды һандар гармонияһы менән аңлатырға ынтылған антик донъя философы хаҡында мәғлүмәттәр бик наҡыҫ.**

# ПИФАГОР ТЕОРЕМАҺЫ: НИСЕК БӘХЕТЛЕ БУЛЫРҒА?

**(Эссе)**

Ул хәҙерге Грецияның Самос утрауында, бай сауҙәгәр ғаиләһендә тыуып үҫеп, философ һәм космолог Ферекидтан һабаҡтар алып, Боронғо Мысыр жрецтарынан - математика, Яҡын Көнсығышта финикий һәм халдей ғалимдарынан - астрономия фәндәрен, Вавилон магтарынан мистикаға өйрәнеп, үҙ илендә танылыу таба. Тиран Поликрат менән бәхәскә инеп, тыуған утрауынан ҡыуып ебәрелә, әммә Боронғо Элладаның Кротон колонияһында (Хәҙерге Италияның Кротоне ҡалаһы) йәшәп, пифагорсыларҙың дини-философик йәшерен мәктәбен нигеҙләй. Урта быуаттар һәм хәҙерге заман астрономдары һәм физиктары Николай Коперниктың, Иоган Кеплерҙың, Исаак Ньютондың һәм хатта Альберт Эйнштейндың тикшеренеүҙәренә Пифагорҙың сфералар гармонияһы һәм донъяның гелеоцентрик системаһы хаҡындағы тәғлимәте ыңғай йоғонто яһай. Пифагор мәктәбенә ҡараған философтарҙың донъяға ҡарашында һандар мистицизмына һәм кеше үлгәндән һуң уның йәненең ҡабаттан икенсе бер кешегә күсә алыуына (метемпсихозға) ышаныу сағылыш таба.

***"Бәхет артынан ҡыума: ул һәр саҡта ли һинең үҙеңдә". Ошо фекерҙе лә Пифагорҙан ҡалған, тип иҫәпләйҙәр.*** Ысынлап та, бәхетле кеше булғанмы икән ошо антик донъя ғалимы? Ул ҡартайған көнөндә Кротонда үҙенә һәм үҙенең философик мәктәбенә ҡаршы ҡутәрелгән бунттан ҡасып китеп, ситтә аслы-туҡлы йәшәй һәм хәйерселектә үлә. Шулай ҙа б.э.т. 5-се быуатҡа виртуаль ҡараш һала алһаҡ, беҙ Пифагорҙың үҙен бик бәхетле кеше итеп тойғанын белер инек: ул, заманының бөйөк ғалимы булараҡ, үҙенең математика өлкәһендәге асыштарының һәм философик ҡараштарының күп быуаттар дауамында кешелеккә файҙалы буласағын күҙаллағандыр.



***Ә беҙ, үкенескә ҡаршы, XXI быуат кешеләре, Пифагорҙың кеше бәхете хаҡындағы фекеренең ни тиклем фәһемле булыуын аңлаған хәлдә лә, уны һәр кемебеҙҙең тормош юлын билдәләүсе принцип итеп ҡабул итмәйбеҙ һәм ҡәҙимге йәшәйешебеҙҙә ҡулланмайбыҙ.***

Әлеге һығымтаға килтереүсе сәбәптәр етерлек. Иң әүәл бәхет төшөнсәһенең асылын уның бар тәрәнлегендә аңлай алмай интегәбеҙ: һәр кеше уны үҙенсә күҙ алдына килтерә, үҙенсә һиҙә, кисерә. Әйткәндәй, талантлы совет яҙыусыһы Аркадий Гайдар "Чук һәм Гек" повесының иң һуңғы һөйләмендә кеше бәхетенең низән тороуын бик ябай итеп аңлата алған: "Нимә һуң ул бәхет - быны һәр кем үҙенсә аңлай ине. Әммә кешеләр барыһы бергә намыҫлы йәшәү, күп эшләү һәм Совет иле тип аталған мөһабәт һәм бәхетле ерҙе нык итеп яратыу һәм һаҡлау зарурлығын белә һәм аңлай ине".

***"Бәхетле бала саҡ" тигән төшөнсә барыбыҙға ла билдәле. Бала бәхете ниҙә һуң?*** Әлбиттә, уны һөйөп-яратып үҫтергән ата-әсәһендә, яҡын туғандарында, тыныс һәм етеш тормошло ғаилә мөхитендә. Балаға дөрөҫ тәрбиә биреүҙең иң отошло юлы - ололарҙың бала күңелен аңлай, тоя белеүе. Балалы йортта ата-әсәнең үҙҙәрен бер ни тиклем кимәлдә балаларса тота белеүе лә үтә мөһим. Һәр баланың теләгәне, тәмле-томлонан башҡа, уйындыр: үҙҙәре менән ихлас, шаярып-көлөп уйнаған оло кешене, ул хатта балаға туған булмаған хәлдә лә, балалар һис ятһынмай, үҙһенеп, яҡын итеп ҡабул итә. Әйткәндәй, япон ғаиләләрендә 5 йәшкә тиклем балаға күп нәмә, әгәр ул бала һаулығына зыян килтермәй икән, рөхсәт ителә. Тап ошондай ғаиләләрҙә бала даими һөйөү тулҡынында тәрбиәләнә, ә был уның күңеленә ихласлыҡ, яғымлылыҡ, изгелек орлоҡтарын сәсә. Шул уҡ Пифагорҙың тағы ла бер фекере ошоға дәлилдер: "Балаларҙың күҙ йәштәрен һаҡлағыҙ, улар һеҙҙе һуңғы юлға оҙатҡанда кәрәк булыр".

***Мөхәббәтле кешеләр, улар ниндәй генә йәштә булмаһын - бәхетле заттарҙан.*** Йәшлек мөхәббәте, ата-әсә булыу шатлығы, бала-сағанды, ейәнейәнсәрҙәрендә һөйөү, ологайған көндәрендә һәр даим һине ҡайғыртып, хәстәрләп тороусы кешең булыуы - былар барыһы ла һис бер бүҫкәрмәҫ бәхет сығанағы. Шулай булғас, үҙеңде бәхетле кеше иткәндәрҙе лә бәхетле итә алыу бурысын йәшәйешебеҙҙең изге бер күренеше итеп ҡабул итәйек.

Күптәребеҙ һөнәрен, хеҙмәтен, көн һайын эшкә йөрөү бурысын бер оло мәшәҡәт итеп ҡарарға күнегеп киткән. Шундай көнгә төшмәҫ өсөн ни эшләргә кәрәк һуң? Бер генә юл - башҡарған эшеңдең һөҙөмтәләренән, хеҙмәти ғәмәлдәреңдән эске ҡәнәғәтләнеү таба белеү. Һин башҡаларға кәрәкле, файҙалы кешеһең - шуны хәтереңдән сығармау фарыз. Ә хеҙмәтең сиктәрендә ижад итә алаһың икән, йә иһә төп эшеңдән башҡа үҙеңә генә тәғәйен ижади донъяң бар икән - һин ысынлап та бәхетле кеше!

Әҙәбиәт, сәнғәт донъяһы, радио-телевидение, шәп фильмдар, гүзәл шиғырҙар һәм йырҙар, халыҡ моңдары - ниндәй күркәм рухи мөхиттә йәшәйбеҙ! Китап, гәзит-журналдар уҡыу зиһенебеҙҙе биләй, күңелебеҙ күген яҡтырта, нурлай, бөтмәҫ-төкәнмәҫ хыялдарға сумдыра, саф хис-кисерештәребеҙҙе тергеҙә. Уйлап ҡараһаң, был да бит беҙҙе күпкә бәхетлерәк итә.

Ғөмүмән, әҙәм балаһын тыуғандан алып бар ғүмере буйына бәхетле итә торған сығанаҡтар бихисап, тик уларҙы күрмәй, иҫәпкә алмай, һанға һуҡмай йөрөгән кеше генә үҙен бәхетһеҙҙәр иҫәбенә индерә. Әлбиттә, донъялыҡта ауырлыҡтар ҙа, трагик хәлдәр ҙә, алама ғәмәлдәр ҡылған кешеләр ҙә етерлек. Әммә шуларҙы ғына күреп, шуларҙы ғына хәтереңдә тотоп йәшәйһең икән - үҙ-үҙеңде бәхетһеҙлеккә дусар итәһең.

***Пифагор бик шәп әйткән бит: бәхет сығанағы үҙеңдә. Мин Пифагорҙың бәхет теоремаһын ошолай итеп нарыҡлар инем: әгәр ҙә һәр кем үҙ бәхетен ишәйтеп, башҡаларҙы ла бәхетле итергә тырышһа, барса халыҡ бәхетле йәшәр ине.***

***Бәхеттән һис бер ҡасан өмөтөбөҙҙө өҙмәй йәшәү кәрәктер.*** Шәхсән таң тыуған мәлдә, шулай уҡ киске шәфәҡте, усаҡта янған утты, төнгө йәшенле ямғырҙы рәхәтләнеп күҙәтергә яратам, ошо мәңгелек тәбиғәт күренештәре фонында йәшәп ятыуымдан йәм табам, үҙенә күрә бәхетле минуттар кисерәм. Шул хаҡта уйланғанымда билдәле яҙыусыбыҙ Әнүәр Бикчәнтәевтың "Яр буйы малайҙары" повесының геройы, Азамат исемле етем малай иҫкә килеп төштө, ул да таң атыуын ҡаршылағанда үҙен бик бәхетле итеп тоя:

"Офоҡ сите саҡ ҡына аллана башланымы, сигнал бирәләрме ни: Азамат гәрәбәләй күҙҙәрен аса ла ебәрә:

- Ҡалай шәп! Мин ваҡытында уяндым, - тип ҡыуана ул. - Һаумы, Ҡыҙыл шар! Әйҙә, дуҫҡай, тәгәрәй тор. Мин хәҙер..."

Йәнә, йөрәгендә тыуған еренә, халҡына, туған теленә ҡарата оло һөйөү һаҡлаған бөйөк Рәмизең шиғыр юлдары әлеге уй-кисерештәремә өр-яңы бер биҙәк өҫтәп торған кеүек тойола:

*"Бәхет - һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ,*
*Килеп инә табын таралғас!..*
*Тик көтәһең, көтөп арығас та,*
*Бәхет өсөн генә яралғас".*

Бәхетле булайыҡ, дуҫтар! Һәр таң атыуына, һәр яңы көнгә аяҡ баҫыуыбыҙға шөкөр итеп йәшәргә яҙһын барыбыҙға ла.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

- Йөҙләп шишмәне төҙөкләндереүҙе маҡсат итеп ҡуйған ейәнсураларҙың тотош Ырымбур өлкәһен, ут күрше күреп, яҡын итеп аралашып йәшәүҙәренә һоҡландым, - тип һөйләне аҙаҡтан Гөлназ Фәрит ҡыҙы был осрашыу тураһында. - "Махсус хәрби операциялағы яугирҙарға ихлас күңелдән, йомарт ярҙам итеүҙәренә һоҡландым. Район етәксеһе Дәмин Марат улының эшлеклелегенә һоҡландым. Һәр халыҡ үҙ етәксеһенә лайыҡ, тиҙәр бит. Тимәк, Ейәнсура халҡы шундай булдыҡлы, хәстәрлекле, маҡсатлы, рухлы етәксегә лайыҡ.

Ә "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡан ҡурсаҡ өйө кеүек йыйнаҡ, матур Кинйәбулат ауылындағы "Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы" исемле түңәрәк ҡор бигерәк тә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Бындай ҙа файҙалы, төптән уйланылған түңәрәк ҡорҙа күптән булғаным юҡ ине. Модераторҙар Резеда Хәйбуллина менән Сирень Насырованың әңгәмәне шул тиклем оҫта ҡороуына хайран ҡалдым. Ҡорҙа йолалар һағында уяу тороусы 83 йәшлек Люция инәй ҙә, күп балалы блогер ҙа, Махсус хәрби операциянан улдарын көткән әсәләр ҙә, уңышлы эшҡыуар-меценат та, ҡатын-ҡыҙҙар табибы ла ҡатнашты. Һәр береһе һорауҙарға һис сурытмай, өҙөп, еренә еткереп яуап бирҙе, тәжрибә уртаҡлашты. Күргәҙмәләре бик шәп ине. Ҡырылмаһы ҡырҡ эше ҡырылып ятҡан ауыл ҡатыны ҡайҙан ваҡыт табалыр ҡул эшенә - шаҡ ҡатырһың! Рәхәтләнеп йырларға, кинәнеп бейергә, ихласлап көлөргә көсө, дәрте булған ауыл ҡатындарына нисек һоҡланмайһың! Ысынлап та, ҡатын-ҡыҙҙың сырағы ҡырҡ шул инде!"

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бындай күркәм сараларҙан, осрашыуҙарҙан һуң гел бер төрлө йомғаҡ яһала: халыҡты тыңларға, уларҙың тәҡдимдәренә лә, кәңәштәренә лә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Ә инде битараф булмаған кешеләр йыйылған сараларҙа уларҙы тыңлаусылары - әлеге осрашыуҙағы кеүек, район етәкселәре, депутаттар, журналистар ҙа булһа, бигерәк тә шәп. Шул саҡта ғына йыйылыш, осрашыуҙарҙың һөҙөмтәһе була. Республика "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыусы Кинйәбулат ауылы халҡының әүҙемлеге, тыуған ергә битараф булмай, уны сәскә аттырыуға, йәшәтеүгә ынтылышы ла матур һөҙөмтәләр бирһен, тип теләргә генә ҡала.**

**С. МАНСУРОВА.**

✔ *Ғалимдар белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай. Мәсәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТЕЛЕФОНДАН ҺӨЙЛӘШКӘНДӘ... умыртҡа бағанаң кәкерәйә

■ Белгестәр иҫкәртә, хәрәкәт иткәндә даими рәүештә телефон ҡулланыу умыртҡа бағанаһының кәкрәйеүенә алып килә. Ғалимдар үткәргән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, заман гаджеттарын әүҙем ҡулланыусылар умыртҡа бағанаһына зыян итеүе бар. Эксперимент барышында унда ҡатнашыусыларға бер юлы өс төрлө эш менән булышырға: билдәле бер траектория буйлап атларға, телефондағы смс хәбәрҙәрҙе уҡырға һәм уларға яуап бирергә тәҡдим ителгән. Әммә был мәсьәләләрҙе барыһы ла үтәй алмаған. Гаджет ҡулланыусылары яйыраҡ һәм эйелеберәк атлаған, ҡайҙа барғандарын контролдә тотоу өсөн, улар һәр ваҡыт баштарын борғоларға мәжбүр булған. Ғалимдар раҫлауынса, кешенең үҙе өсөн һиҙелерлек булмаған был үҙгәрештәр вестибуляр аппаратҡа һәм умыртҡа бағанаһына тәьсир итә. Бынан тыш, иғтибар ситкә йүнәлтелгән булыуы сәбәпле, улар үҙҙәренең хәүефһеҙлеге тураһында ла уйланмай.

■ Ғалимдар белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәсәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

■ Ҡатын-ҡыҙ интуицияһы - ул кешелек йәмғиәте тарафынан уйлап табылған миф, ти Хартфордшир университеты (Бөйөк Британия) ғалимдары. Ғалимдар 15 мең кеше ҡатнашлығында эксперимент үткәргән. Улар фотоларҙағы кешеләрҙең ҡайһыһы ихлас, ә ҡайһыһы яһалма йылмайғанын асыҡларға тейеш булған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 80, ир-аттарҙың 58 проценты үҙҙәренең яҡшы интуицияға эйә булыуы тураһында белдерә. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ике енес араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ, һорауға ир-аттарҙың - 72, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың 71 проценты дөрөҫ яуап биргән. Ғалимдар иҫәпләүенсә, интуиция нигеҙендә белем кимәле ята.

Ирҙәрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың биологик айырмаһы гормональ һәм репродуктив системала булған айырмалыҡтарға бәйле, ә бына улар араһында когнетив айырмалыҡтар бөтөнләй юҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, кешенең интуицияһы уның аҡылы һәм мәҙәни кимәленән тора, тип белдерә ғалимдар. Профессор Робин Хогарт фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙар һиҙгерерәк, шуға ла уларҙың фекер йөрөтөүе йышыраҡ осраҡта дөрөҫкә сыға.

Кешелек барлыҡҡа килгәндән алып, ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырыу, уларҙың бер-береһенән өҫтөнлөктәрен эҙләү модаға ингән, әммә был айырмалыҡтар ул тиклем ҙур ҙа түгел. Беҙҙең мәҙәниәттән дөрөҫ булмаған фактҡарҙы алып ташлау кәрәк, - ти Лондон университеты ғалимы Альберт Барке.

*ШУЛАЙ ҘА БУЛА!*

**Интернет селтәрен ҡарап ултырғанда яңылыш ҡына 1996 йылдың 13 декабрендә сыҡҡан 150-се һанлы Федераль Законды күреп ҡалдым. "Ҡорал хаҡында" (Об оружии) тип атала ул. Был закон мине бер ҡасан да ҡыҙыҡһындырғаны юҡ ине, әммә уның шул атамаһын уҡығас, студент сағымда үҙем менән булған бер ваҡиға иҫемә төштө. Бик ныҡ хәтеремдә ҡалған ул.**

# МИЛИЦИЯҒА ТОТОЛОУЫМ ХАҠЫНДА,

## йәки Кеҫәгеҙҙә бәке йөрөтмәгеҙ, егеттәр!



Медицина институтының икенсе курсын уҡып бөткәс, йәйге сессияның һуңғы имтиханын биргән көндө булды ул хәл. "Биохимия", "Нормальная физиология" һымаҡ ҡатмарлы ғына, (хатта "Научный атеизм" тип аталған, бөтөнләйгә кәрәкһеҙ) экзамендарҙы ла уңышлы тамамлау унайы менән бер нисә егет йыйылышып алып, Салауат һәйкәле янына барып килергә булдыҡ. Хәҙер нисектер, белмәйем, әммә ул саҡ беҙ, студенттар, шул майҙанды "пятачок" тип атап йөрөттөк. Көн дә тиерлек кискә ҡарай шунда йыйыла инек. Республикабыҙҙың төрлө районларынан килеп, баш ҡаланың уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән йәш егеттәр, ҡыҙҙар һәйкәл майҙанында бер нисә урында төркөм яһап, гармунға, ҡурайға "ритайым" ойоштора...

Күпмелер бейегәс, ҡараңғы төшә башланы. Бер танышым менән дөйөм ятағыбыҙға ҡайтырға юлландыҡ. Фрунзе (хәҙерге Зәки Вәлиди) урамы буйлап килеп, институтыбыҙға яҡынлашҡас, күрәм: тротуар буйында бер нисә егет тора. Бер аҙ "төшөрөп" алғандары ла һиҙелә. Уларҙың береһе минең танышымдың танышы булып сыҡты. Тик... дуҫы түгел, ә, киреһенсә, ҡасандыр улар араһында ниндәйҙер конфликт булған. Ҙур ғына көҙгөлә әлеге егет танышымдың сәсенән эләктереп алды (ул саҡта йәш егеттәр ҙә оҙон сәс йөрөтә ине), икенсеһе уны дөмбәҫләй ҙә башланы. Мин, әлбиттә, түҙмәнем, танышымды яҡлашып, теге "амбал"ға барып йәбештем. Үҙенә һис ҡаршылылышырға маташмаған иптәште ҡулынан ысҡындырҙы ла, был бәйләүән миңә ташланды...

Шулай, беҙ айҡашып йөрөгән арала, ҡайҙандыр бер нисә дружинник килеп сыҡмаһынмы! Егеттәр барыһы ла ҡүҙ асып йомғансы, тырым-тырағай таралышып, юҡ булды. Мин яңғыҙым ғына тороп ҡалдым. Дружинниктарҙан ҡасыуҙы кәрәк тип тапманым, хатта ҡыуандым ғына: "Ҡалай яҡшы, ваҡытында ғына килеп сыҡтылар!" Ысынлап та, ни өсөн уларҙан ҡасырға? Мин бит иптәшемде яҡлашып, хулигандарҙан зыян күреүсе кеше... Әлеге танышымдан да (дуҫым тиһәм, килешеп етмәҫ һымаҡ) елдәр иҫкәйне. Ул да һыпыртҡан. Ҡулдарында ҡыҙыл повязкалы кешеләрҙе бер милиционер оҙатып та йөрөй икән. Дружинниктар теге егеттәр артынан ҡыуырға ла уйламаны шикелле, уның ҡарауы, ғәжәпкә, минең ике ҡулымды артҡа шаҡарып, тотоп та алдылар!

"Кем һин, ҡайҙан?" тигәстәре, һис бер нәмә уйлап тормаҫтан, Медицина институтының студенты икәнемде әйтә һалдым. Уларҙың мине ысҡындырып ебәрәүҙәрендә шигем дә юҡ... Тик былар шулай уҡ ныҡ тотҡан килеш, мине милиция участкаһына алып китте. Шунда ғына үҙемдең ВУЗда уҡыуымдың ҡурҡыныс аҫтында ҡалыуы хаҡында уйлана башланым. Ҡайҙа уҡығанымды ла әйтеп өлгөргәс, һис шикһеҙ, институтҡа хәбәр итәсәктәр! Урам буйында һуғышып йөрөгән өсөн... Ниндәйҙер ашығыс сара күрергә кәрәк! Участкаға барғас, исмаһам, фамилиямды йәшерергә ине тип уйлайым. Кеҫәмдә документтарымды йөрөтә торған ғәҙәтем дә бар шул, уларҙы нишләтергә? Тикшерә башлаһалар, фамилиям фашланасаҡ! "Медик" икәнемде күптән белделәр... "Ленин скверы" аша сығып барғанда: "Егеттәр, срочно ғына бынау ҡыуаҡ артына инеп сығырға кәрәк!" - тип, хәжәт үтәргә тәҡәт итә алмаған кешегә һабыштым. Ҡараңғылыҡты файҙаланып, һиҙҙермәй генә, студент билетын, паспортымды кеҫәмдән сығарып, ҡыуаҡ төбөндәге үлән араһына төшөрҙөм, иркен тын алып ҡуйҙым.

Участкаға барғас, ысынлап та, кеҫәләремде тикшерә башланылар.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҒӘЙБӘТ ҺӨЙЛӘМӘЙЕК



**Һыҙланма, дуҫ, ғәйбәт оҙон телле,**
**Әммә ҡыҫҡа уның ғүмере.**
**Күрмәйһеңме, ғәйбәт ҡапсығының**
**Йөҙө ҡара, биле көм(ө)рө,**
**- тип яҙа Зәйнәп Биишева үҙенең "Һыҙланма, дуҫ" тип аталған шиғырында. Ысынлап та, кемделер сәйнәү, уның етешһеҙлектәре хаҡында һөйләү, тикшереү, йәғни ғәйбәт - киң таралған иң ҙур кәмселектәрҙән, боҙоҡлоҡтарҙың, гонаһтарҙың береһе. Ҡайһы берәүҙәр ғәйбәттең насар икәнен белә тороп та, унан ҡотола алмай. Сөнки ул - нәфескә киңәнес килтергән, ялған илһамланыу, дәрт биргән ағыулы ләззәт. Ул имандың зәғиф, йә бөтөнләй булмауы билдәһе.**

Аллаһы Тәғәлә ғәйбәт тураһында Ҡөрьән Кәримдә: "Әй, иманлы к*ешеләр! Уйҙырмаларҙың (ғәйбәт, имеш-мимештәрҙән)* күбеһенән ваз кисегеҙ. Уларҙың байтағы гонаһ. Кешенең серен һатмағыҙ, шымсылыҡ ҡылып, бер-берегеҙҙең ғәйебен *(тырнаҡ аҫтынан кер)* эҙләмәгеҙ. Берегеҙ икенсегеҙҙең артынан *(яман)* һөйләп ҡалмаһын. Үлгән туғанының итен ашап, кеше тәм табырмы? Был нәжес бер ғәмәл булыр ине. Шулай булғас, *(был харамдарҙы ҡылып, гонаһҡа батыуҙан)* Аллаһтан ҡурҡығыҙ. Шик юҡтыр, Аллаһ тәүбәләрҙе ҡабул итә һәм ярлыҡай"(49:12), - тип әйтә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм ғәйбәттең аңлатмаһын аныҡ итеп аңлатып ҡалдырған беҙгә. "Беләһегеҙме ғәйбәттең нимә икәнен?" тип һораған ул сәхәбәлә-

✔ Ғәйбәт һөйләү менән яла яғыусылар үҙҙәрен ике донъяла ла ҙур ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Кешенең итен ашау сирҡанысмы? Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешене ашаусылар ниндәй оло язаға тарттырыласағын күҙ алдына килтереүе лә ауыр.



Тик пиджагымдың кеҫәһендә... бәке ятҡан бит, ауыҙына май булғыры. Ятаҡ бүлмәһенең асҡысын юғалтып, ана шул бәке менән ишек йоҙағының телен шылдырып, асып йөрөй торғайным. Әлеге ҡыуаҡ араһында уны ташлап ҡалдырырға башым етмәгән!..

Дежурҙағы милиционер протокол төҙөй башланы. Фамилиямды Ҡәйүмов тип, исемем, атайымдың исемен дә башҡа итеп күрһәттем. Ышандылармы-юҡмы, әммә мин әйткәнсә яҙып ҡуйҙылар. Уларҙың иғтибарын, башлыса, бәке йәлеп итте, шуның буйынса һорау ала башланы дежурный. Ни өсөн "һалҡын ҡорал" алып йөрөүемде төпсөндөләр. Бөгөнгөләй хәтеремдә, һабы төлкө һүрәте менән биҙәлгән бәкемде алғас та "У задержанного отобран карманный нож "лиса"..." тип яҙып ҡуйҙылар протоколда. Үҙемде участканан сығарып ебәреүҙәрен көтөүем юҡҡа ғына булды.

- Бында төнәргә тура киләсәк, - тине дежурный. Кеҫәләге ҡалған нәмәләр араһында сәғәтемде ремонтҡа биргән квитанциям да ятҡан икән (унда фамилиям яҙылғайны). Дежурныйға һиҙҙермәй генә уны нәскейемдең эсенә тыҡтым... Ҡаҡ кушеткала төнәргә тура килде. Йоҡо ҡайғыһы булманы, әлбиттә. Сөнки әлеге дежурный миңә иртәгәһен прокурорға барасағыбыҙ хаҡында "һөйөнсөләгәйне". Бәке арҡаһында. Ентекләп тикшеренә башлаһалар, минең ысын исем-фамилиямды асыҡлау улар өсөн бер ни ҙә тормаҫын аңлайым. Сөнки студент-медик икәнде беләләр... Төнө буйы уйланып сыҡтым.

Иртәгәһен Карл Маркс урамындағы прокуратураға алып килделер. Прокурор ағай алай ҙа һәйбәт кенә башҡорт кешеһе булып сыҡты. Ни өсөн минең кеҫәмдә бәке йөрөтөүем хаҡында ентекләп һорашып, яҙып алды. Ишек аса торған бәке, тип, матур ғына итеп башҡортсалап һөйләп бирҙем. Артабан ни өсөн егеттәр менән бәйләнешеп киткәнем, нисек мине дружинниктар алып китеүе хаҡында ла бәйнә-бәйнә һөйләп биргәс, был ағай миңә ышанған һымаҡ тойолдо. Кешенең күҙ ҡарашынан да бәғзе ваҡыт һиҙелә бит уның ниндәйерәк икәнлеге.

- Ә һин яҡлашҡан теге "другың" ҡайҙа һуң?

- Әллә... Ул шунда уҡ юҡ булды. Ҡасып киткәндер...

Прокурор ағай ирендәренең сите менән серле генә йылмайып, башын сайҡап, телен шартлатып ҡуйҙы ла, башҡа бер ни ҙә өндәшмәне. Бына шулай, бик ипле генә һорау алғандан һуң, протокол төҙөп, уға ҡул ҡуйҙырҙы. Үҙемде иң борсоған һорауымды бирҙем:

- Ағай, минең хаҡта институтҡа хәбәр итмәҫһегеҙ ул?..

- Беҙ хәбәр итергә бурыслыбыҙ. Был бик етди осраҡ. Бәке алып йөрөгән өсөн законда статья бар.

- Мине институттан ҡыуып сығарһалар, әсәйем үлеп ҡуйыр тип ҡурҡам. Ул сирле, йөрәге ауырта...

Прокурор ағай, бер аҙ уйлап алғас, былай тине:

- Хәҙер мин һиңә квитанция яҙып бирәм. Банкҡа барып, 25 һум штраф түләргә кәрәк булыр. Һис кисектермәй түләп, бөгөн үк квитанцияңды алып килһәң, бәлки, хәбәр итмәҫбеҙ...

Мин, әлбиттә, бик ныҡ шатланып, прокуратуранан сығып киттем. Иң беренсе нәүбәттә, әлеге Ленин скверына барып, ағас төбөнә ҡалдырып киткән студент билетым менән паспортымды табып алдым. Алай ҙа берәү ҙә күрмәгән икән. Хәҙер бер проблемам ҡалды, ҡайҙан 25 һум аҡса табырға. Кеҫәмдә 3-4 тәңкә генә аҡсам ҡалған... Ауылға ҡайтып етерлек. Ә ул саҡтағы егерме биш һум ҙур ғына аҡса ине (яҡынса, бер гармун йә бер гитара һатып алып була ине ул аҡсаға). Башҡа таныш егеттәрҙең дә кеҫәләрендә ундай сумма һәр саҡ ҡына булмай. Үҙем менән бергә уҡып йөрөгән Юлай ағайыма мөрәжәғәт итергә шөрләңкерәйем. Үҙе бер ҡасан да башҡалар менән һуғышып йөрөмәгән, ифрат етди кеше ул ағайым. Белеп ҡалһа, минең тетмәмде тетәсәк. Әллә ни ғәйебем ҙур булмаһа ла...

Авиация институтында уҡыған класташым Абдуллин Исламдың дөйөм ятағына киттем. Алай ҙа ул бүлмәһендә булып сыҡты. Сираттағы имтиханға әҙерләнеп ултыра ине. Хәл-әхүәл һорашҡас, ситуацияны һөйләп бирҙем. Әмәлгә ҡалғандай, уның аҡсаһы ла бар икән. Кәрәк сумманы әлеге Ҡәйүмов исеменән банкка түләй һалып, прокурор ағайға квитанцияһын алып барып та бирҙем.

Ул саҡтарҙа, Советтар Союзында, тейешенсә рөхсәт ҡағыҙың булмаһа, шундай "һалҡын ҡорал"ды алып йөрөү закон тарафынан тыйылған (ст.218. УК РСФСР), хатта енәйәтсел яуаплылыҡҡа тарыуың ихтималлығы булған! Ә инде 1996 йылдың 13 декабрендә сыҡҡан 150-се һанлы Федераль Законға ярашлы, уның өсөн енәйәтсел эш ҡаралмай, әммә лезвиеһы билдәле бер оҙонлоҡтан ашҡан бәке, бысаҡ (икмәк киҫә торғандан тыш) алып йөрөгән кешене административ язаға тарттырыу һәм был "ҡорал" ды закон һаҡсылары тарафынан конфискациялап, тартып алыу тигән нәмә бар. Хәҙерге шул законға ярашлы, кеҫәлә алып йөрөй торған ябылмалы бәкенең лезвиеһы 150 миллиметрҙан, ә ябылмай торған бысаҡтыҡы - 90 милиметрҙан ашыу булырға тейеш түгел. Шунан ҙурыраҡтарына рөхсәт ҡағыҙы йөрөтөү кәрәк икән.

Бер уйлаһаң, урыҫ әйтмешләй, абсурд бит был: яуыз кеше 150, хатта 90 миллиметрлыҡ бәке менән дә әллә күпме яуызлыҡ ҡыла ала бит инде ул... Ә күптәр бит һис бер яуыз ниәтһеҙ йөрөтә бындай ҡоралды. Көнкүрештә бысаҡһыҙ тормош көтөүҙе лә күҙ алдына килтереп булмай. Тик, кемдер әйтмешләй, "Закон сеть - закон"... Һәр хәлдә, әлеге минең һымаҡ ситуацияға тарыған осраҡта, закон органдары алдында үҙеңдең "дөйә түгеллегеңде" иҫбат итеүҙәре еңелдән түгел. Шуға күрә лә, айырыуса йәштәргә бына шуны әйткем килгәне. Бик тә бик артыҡ ныҡ кәрәк булмаһа, бәке-маҙарҙы үҙең менән бөтөнләйгә йөрөтмәү хәйерлерәк. Ә инде, алып йөрөгән хәлдә, баяғыса ситуация килеп сыға икән, шунда уҡ был "һалҡын ҡорал"дан ҡотолорға тырышыу кәрәк. Бер ниндәй, хатта административ яза бирелмәгән хәлдә лә, кеҫәңдә йөрөткән ана шул бәләкәс кенә бәке хаҡында закон вәкилдәре менән "әңгәмәләшеү" ҙә бер килке нерв күҙәнәктәрен бөтөрә инде ул. Бына шул.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

ренән. "Аллаһ һәм Уның Рәсүле яҡшыраҡ белә", тип яуаплаған улар. "Ғәйбәт - ҡәрҙәшең тураһында уға оҡшамаясаҡ итеп һөйләү (телгә алыу)". Бер кеше: "Әгәр минең әйткәндәрем ул кешелә ысынлап та булһа?" - тип һораған. Аллаһ Рәсүле: "Әгәр ҡәрҙәшеңдә булған (әммә ул был турала һөйләүҙәрен теләмәгән, уға был оҡшамаған) нәмә хаҡында һөйләһәң, һин уның турала ғәйбәт һөйләнең килеп сыға. Ул кешелә булмаған нәмә хаҡында һөйләһәң - ул саҡта уға яла яҡтың тигән һүҙ", - тип яуап биргән.

Ғәйбәт һөйләү менән яла яғыусылар үҙҙәрен ике донъяла ла ҙур ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Кешенең итен ашау сирҡанысмы? Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешене ашаусылар ниндәй оло язаға тарттырыласағын күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Ә бит Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм ғәйбәт һөйләүҙе үлгән кешенең итен ашау менән юҡҡа ғына сағыштырмаған. Шуға күрә, кеше булмағанда уның тураһында, уның тышҡы ҡиәфәте, кейеме, йөҙө, сығышы, тәртибе, һ.б хаҡында, ул кеше ишеткәндә оҡшамаясаҡ барлыҡ һүҙҙәрҙән, әңгәмәләрҙән, серләшеүҙәрҙән таҙарынырға тырышайыҡ.

Йыш ҡына беҙ үҙебеҙҙең һәр хәрәкәтебеҙ, ҡылығыбыҙ, шул иҫәптән һүҙҙәребеҙҙең фәрештәләр тарафынан яҙылыуын һәм Ҡиәмәт көнөндә үҙебеҙгә ҡаршы ҡулланыласағын онотабыҙ. Ғәйбәт кеше хоҡуҡтарын сикләү менән бәйле гонаһтарҙан һанала. Йәғни, күп гонаһтарҙы эшләп, һуңынан ихлас тәүбәгә килһәң, Аллаһы Тәғәлә уларҙы ғәфү итә. Был осраҡта, Аллаһы Тәғәлә генә түгел, һинең телеңдән, ҡулыңдан, власыңдан зыян күргән кеше шәхсән рәүештә ғәфү итергә тейеш. Әгәр ғәфү итмәһә, ғәйбәтсенең (залимдың, күп кешеләрҙе алдаусының һәм башҡа кешеләрҙең өлөшөнә хаҡһыҙ рәүештә инеүсенең) изге ғәмәлдәре тартып алынасаҡ һәм уның теленән (ҡулынан, власынан) зыян күреүселәргә алып биреләсәк. Ә изге ғәмәлдәре бөткәс, ул теге кешенең гонаһтарын үҙ өҫтөнә аласаҡ. Ғүмер буйы ғибәҙәттәрҙе үтәй килеп, Аллаһы Тәғәләгә имандан ситкә китмәйенсә лә, телеңде, ҡулыңды, тойғоларыңды тыя белмәһәң, бер нимәһеҙ тороп ҡалыу ҡурҡынысы бар.

Ғәйбәт һатыу, яла яғыу йыш ҡына кеше тойғоларына буйһонмаған ҡылыҡтар ул. Шуға ла кешегә даими рәүештә камиллашыу, үҙ әхлағын яҡшыртыу йүнәлешендә эш алып барырға кәрәк. Шулай уҡ үҙең хаҡында ғәйбәт һөйләүселәрҙе ғәфү итергә, нәсихәтләргә, әммә ләкин улар кимәленә төшөп, яуап итеп, улар хаҡында ғәйбәт һөйләүгә тиклем төшөргә ярамай.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

* * *

Билдәле инглиз скульпторы Генри Мур үҙенең ҡырын ятҡан ҙур фигураларын өлөштәргә бүлгән. Ни өсөн? Бының менән ул фигураларҙың монументаллеген, көсөн, ауырлығын һыҙыҡ өҫтөнә алған. Төньяҡтағы урыҫ йорттарының ағас аттары менән дә тап шулай булған. Бүрәнәлә тәрән ярыҡтар барлыҡҡа килгән. Бүрәнәгә балта теймәҫ элек тә ярыҡтар булған ҡайсаҡ, әммә был төньяҡ скульпторҙарын һис кенә лә ҡурҡытмаған. Улар "материалдың ярылыуына" күнеккән. Сөнки йорт бүрәнәләре лә, терәү бағаналары ла ярыҡлы булған. Бына шулай халыҡ скульптураһы заманса скульптураның ҡатмарлы эстетик принциптарын аңларға өйрәтә.

Халыҡ ижады өйрәтеп кенә ҡалмай, ә бик күп заманa художество әҫәрҙәренә нигеҙ булып та тора.

Марк Шагал ижад юлын Белоруссияның халыҡ ижадына нигеҙләнеп башлаған: уның сағыулығы һәм композиция үҙенсәлектәренән, уларҙағы тормошто һөйөүсәнлектән, шатлыҡты осоп барған кеше рәүешендә сағылдырыуҙан, йорттар уйынсыҡ кеүек булыуынан һәм хыял ысынбарлыҡ менән тоташыуынан. Уның сағыу һәм ала-сола һүрәттәрендә халыҡтың яратҡан ҡыҙыл, сағыу зәңгәр төҫтәр өҫтөнлөк итә, ә аттар һәм һыйырҙар һиңә бойоҡ кеше күҙҙәре менән ҡарай. Хатта оҙаҡ йылдар Көнбайышта йәшәүе лә уны ошо белорус тамырҙарынан айыра алмай.

Бик күп ҡатмарлы живопись һәм скульптура әҫәрҙәрен балсыҡтан яһалған Вятка уйынсыҡтары йәки төньяҡта балта оҫтаһы яһаған ағас уйынсыҡ та өйрәтә.

Билдәле француз архитекторы Орбюзье әйтеүенсә, ул үҙенең бик күп архитектура алымдарын Охрида ҡалаһындағы халыҡ архитектураһы өлгөләренән үҙләштергән: атап әйткәндә, ул йорт ҡаттарын берберенән айырып эшләргә өйрәнгән. Йорттоң өҫкө ҡаты аҫҡыһына ҡарата саҡ ҡына ҡабырғаһы менән "боролоп" тора, һәм уның тәҙрәләренән урам, тауҙар йәки күл асыҡ күренә.

Ҡайһы саҡта сәнғәт әҫәренә бер күҙлектән генә сығып ҡарау етмәй. Бына, мәҫәлән, портретты төп нөсхәһенә оҡшағанмы-юҡмы тип кенә ҡарайҙар. Әгәр оҡшамаған булһа - был бөтөнләй портрет түгел, ә ул гүзәл сәнғәт әҫәре булыуы ихтимал. Әгәр тик "оҡшаған" булһа? Был ғына етәрлекме? Сөнки оҡшашлыҡты художестволы фотоһүрәттә эҙләүе яҡшыраҡ. Бында оҡшау ғына түгел, ә тотош бер документ: бөтә йыйырсыҡтар һәм һытҡылар урынында.

Оҡшатып төшөрөлгән булыуҙан тыш, портретҡа тағы нимә кәрәк һуң? Беренсенән, оҡшашлыҡ үҙе кешенең рухи асылына төрлөсә кимәлдә үтеп инеүе ихтимал. Быны фото төшөргәндәрен көтөп торған кешенең йөҙөндә көсөргәнеш булмаһын, ҡәҙимгесә генә ҡарап торһон, үҙ-үҙен тотошо иркен һәм үҙенә хас булһын өсөн уңайлы мәлде тотоп алырға тырышҡан яҡшы фотографтар ҙа белә. Портрет йәки фотоһүрәт сәнғәт әҫәренә әүерелеүенә бына ошондай "эске оҡшашлыҡ" бик ҙур йоғонто яһай. Ләкин икенсе төрлө матурлыҡ та ҙур урын биләй: төҫтәрҙең, һыҙыҡтарҙың, композицияның матурлығы. Әгәр һеҙ портреттың матурлығын унда һүрәтләнгән кешенең гүзәллегенә ҡарап билдәләйһегеҙ һәм портреттың үҙенең үҙенсәлекле, йәнле йәки график матурлығы була алмай, тип фекер йөрөтәһегеҙ икән, - һеҙ әле портрет живописын аңлар кимәлдә түгел.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

ХӘТЕРЛӘП...

# АБРУЙЫ -ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘ



**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисаметдинованың тыуыуына 75 йыл тулыуға арнап, "Мәғариф системаһында туған тел, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт: традициялар һәм инновациялар" Бөтә Рәсәй (халыҡ-ара ҡатнашлыҡта) ғилми-ғәмәли конференция үткәрелде.**

Конференция эше университеттың башҡорт филологияһы факультеты корпусында профессор Ф.Ғ.Хисамитдинова исемендәге аудитория асыуҙан башланды. Сараның координаторы булараҡ, башҡорт филологияһы факультетының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире Сәлимә Айбулат ҡыҙы Таһирова университеттағы матур традиция - университетты, мәғарифты үҫтереүгә тос өлөш индергән күренекле ғалимдарҙың хәтерен мәңгеләштереү маҡсатында улар исемендәге аудиториялар булдырылыуы, уларҙың киләсәк быуынға тәрбиәүи әһәмиәте тураһында билдәләп үтте.

Артабан фекер алышыу филология һәм педагогика фәненең иң көнүҙәк проблемаларына арналды. Мәсәлән, профессор Фирҙәүес Хисаметдинованың төрки филологияһына һәм лингводидактика үсешенә индергән өлөшө, белем биреү ойошмаларында (балалар баҡсаһы, мәктәп, махсус урта белем биреү, вуз) туған телдәрҙе һәм туған әҙәбиәтте уҡытыу һәм өйрәнеү, полиэтник йәмғиәттә полилингваль белем биреү теорияһы һәм методикаһы, яңыртылған Федераль дәүләт мәғариф стандарттары шарттарында туған телдәрҙе һәм әҙәбиәтте уҡытыуҙа инновацион алымдар һәм башҡа мәсьәләләр тикшерелде. Конференцияға Башҡортостан һәм Рәсәйҙән генә түгел, сит илдәрҙән, мәсәлән, Төркиә, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан һәм башҡа дәүләттәрҙән бөтәһе 130-ға яҡын мәҡәлә ҡабул ителде. Ойоштороусылар билдәләүенсә, мәҡәлә авторҙарының байтағы Фирҙәүес Хисамитдинованың тормош һәм хеҙмәт юлы, төрлө йүнәлештәге фәнни хеҙмәттәренә арналғайны. Педагогия университетының башҡорт теле һәм әҙәбиәте доценты Зөләйха Хәбибуллина ғалимәнең тормош юлына, фәнни эшмәкәрлегенә төплө анализ яһаһа, Новосибирск ҡалаһынан профессор Н.С Утегешев ғалимә менән лексикография өлкәһендәге фәнни бәйләнештәре һәм ҡаҙаныштары, аспирант Р.Т Моратова ғалимәнең мифология өлкәһендәге әһәмиәтле тикшеренеү һөҙөмтәләре, Ҡаҙан федераль университетынан профессор Ә.Ш. Йосопова Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы хеҙмәттәренең төркиәт донъяһындағы урынына арналған тәрән йөкмәткеле докладтарын тәҡдим итте.

Салауат Юлаев ордены кавалеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисаметдинова - М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт университеты башҡорт филологияһы факультетының тәүге деканы, ул һәр ваҡыт туған университеты, факультеты менән тығыҙ бәйләнештә була, юғары уҡыу йортоноң фәнни һәм мәҙәни сараларында ҡатнаша, "Иң яҡшы педагогик династия" төбәк-ара конкурсының һәм башҡа сараларҙың жюри ағзаһы булараҡ сығыш яһай. "Беренсенән, кем генә булып эшләһәм дә, һәр ваҡыт үҙ эшемдә яраттым: уҡытыусы, декан, министр, директор. Мин ғаиләмде яратам, хәҙер инде ейәндәремдә. Донъяны урап үткән бәләкәй ауыл ҡыҙы ғалим һәм кеше булып танылa, күренекле уҡытыусыларҙан белем ала һәм ғәҙәти булмаған кешеләр менән аралаша. Әлбиттә, мин бәхетле кеше!" - Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы үҙе тураһында шулай ти. Ә беҙ, булаcаҡ уҡытыусылар, шундай ғалимдарыбыҙ булыу менән ихлас ғорурланабыҙ.

**Ләйсән ФӘТТӘХОВА,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башҡорт филологияһы факультетының 4-се курс студенты.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

## ҺӘҘИӘ АПАЙҒА АРНАП...



**Өфөләге Милли әҙәбиәт музейында "Башҡорт әҙәбиәте ынйыһы" күргәҙмәһе асылды. Ул бөйөк яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты һәм Көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙары араһында беренсе роман яҙған Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуыуына 120 йыл тулыуға арналды.**

Күргәҙмә әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтендә мөһим урын биләгән Һәҙиә Дәүләтшинаның ижады менән таныштыра. Экспозицияла китаптар, фотоһүрәттәр, шулай уҡ яҙыусының тормошо һәм эшмәкәрлеге менән бәйле үҙенсәлекле артефакттар тәҡдим ителә. Шулай уҡ сараға танылған романсыны күреп белгән яҙыусы Мөкәрәмә Садиҡова һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры, Һ. Дәүләтшина исемендәге премия лауреаты Гүзәл Ситдыҡова саҡырылған. Күргәҙмә асылғандан һуң республиканың уҡыу йорттарында Һәҙиә Дәүләтшина ҡалдырған мәҙәни мирасты тәрәнерәк аңлатыу өсөн тематик лекциялар һәм остаһыҡ дәрестәре ойоштороу ҡаралған. Әҙәбиәт һөйөүселәрҙе, студенттарҙы һәм тикшеренеүселәрҙе башҡорт әҙәбиәтенең сағыу донъяһы менән ентеклерәк танышырға, күренекле яҙыусының тормошо һәм ижады хаҡында күберәк белергә саҡыралар.

## ЮЛДАШТАРҒА АЛҠЫШЛАП...

**"Юлдаш" радиоһы 25 йыллығы уңайынан ҙур юбилей сараларын Ишембай ҡалаһында тыңлаусылары менән осрашыуҙан башланы.**

Ишембай ҡала мәҙәниәт һарайына юлдаштарҙы күрергә тип ҡала халҡы ғына түгел, Ишембай районы ауылдарынан, шулай уҡ Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Ейәнсура, Көйөргәҙе, хатта Бөрйән районынан да килеүселәр бар ине. Шығырым тулы залда һәм балконда алма төшөрлөк тә урын булманы. "Тыңлаусыларыбыҙ менән осрашыуҙарҙы һуңғы йылдарҙа йыш ойоштораныҙ, беҙҙе бөтөн ерҙә лә матур, ихлас ҡаршы алалар. Ишембайҙағы сара шулай ҙа хәтерҙә иң ҡалғаны булыр, моғайын. Бында бик ихлас, йыр-моңға әүәҫ, талантлы халыҡ йәшәй икән", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлаша радио хеҙмәткәрҙәре. Улар әйтеүенсә, зал тәүге сығышты уҡ дәрәү алҡышлап ҡаршы алған һәм тамаша аҙағына тиклем ҡул сабып, артистарға ҡушылып йырлаған, бейегән.

"Юлдаш" радиоһы Ишембайға уйнап-көлөр өсөн генә килмәгән, әлбиттә. Осрашыуға һатылған билет аҡсаһына улар МХО-лағы егеттәребеҙгә кәрәк-яраҡ алып, уны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ойошторған ылау менән Луганскиҙа хәрби госпиталдә ятҡан яугирҙарға оҙатҡан. Юлдаштар менән осрашыуға ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан яугирҙар ҙа килгәйне. "Радионы беҙ тыуған яҡтан ситтә тыңлайбыҙ. Ул беҙгә Башҡортостаныбыҙҙың сәләмен алып килә. Мөмкинлек сыҡҡан һайын вацап аша хәбәр ебәрергә тырышам, айырыуса "Теге өсәү" менән аралашырға яратам", - тип һөйләне уларҙың береһе.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 март "Ваня ағай"** (А.П.Чехов, С.Пектеев), провинциаль проза. 16+
**15 март "Ҡыҙ урлау",** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
**16 март "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+
**18 март "Ах, был мөхәббәт!.."** (А. Чехов, А. Абушахманов, А. Әмиров). 12+
**19 март "Һуңғы йәйләү"** (О.Жанайдаров, А.Абушахманов), драма. 16+
**20 март "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина, И.Ҡаҙаҡбаев). 6+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 март "Күктә ике йондоҙом балкыганда"** (И. Асылбаева, И. Лоҡманов), музыкаль мелодрама. 16+
**15 март "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+
**16 март "Отец"** (М. Горький, Д. Хөснияров), ғаилә драмаһы. 12+
**19 март "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәитбаев, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 16+
**20 март "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**14 март "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 16:00. 0+
**15 март "Ҡар бабай һәм ҡояшҡай"** (А. Малахов). 14:00. 0+
**"Русалочка"** (С. Чураева). 12:00 һәм 15:00. 12+
**16 март "Винни-Пух"** (Д. Гәрәева, Д. Щербакова). 0+
**19 март "Озеро заколдованного коня"** (Г. Шафиков). 19:00. 12+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 март "Мин бәхетле"**, Фәрзәнә Ғаззалова ижадының 20 йыллығына ҡарата концерт. 12+
**16 март "Бөтә ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты"**, Владислав Мортазин (орган). 12+
**18 март "О, Театр!"** Бөтә донъя театр көнө алдынан Таһир Сәйфуллин исемендәге БР дәүләт академия хор капеллаһы концерты. 12+
**20 март "Цветень"**, рус халыҡ инструменттары ансамбле концерты (Ҡурған филармонияһы). 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 март "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х.Латыпова, С. Латыпов), музыкаль комедия. 12+
**18 март "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н.Мусин, инсц. З.Бураҡаева ), фантастик төш. 16+
**19 март "Метранпаж мажаралары"** (А.Вампилов), трагикомедия. 12+
**20 март "Һөйөү көсө"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**16 март "Бременские музыканты"**, концерт. 0+
**20 март "Тарих һаҡлай йәнле ҡурай"** Динара Абдуллинаның концерты. 6+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**12 март** Гөлназ Асаеваның концерты. 12+
**16 март "Үҙгәрҙем"** Руслан Кирамутдиновтың концерты. 12+
**20 март** Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле концерты. 6+

### БР Милли музейы

**14 март "Музей мафияһы"**, психологик уйын. 19:00. 14+
**15 март "Ғаилә шәмбеһе"** программаһы сиктәрендә "Боронғо ҡомарткылар". 15:00. 5+
**19 март "Музей шаршамбыһы"** акцияһы сиктәрендә "Шаян шарлауыҡтар". 14:00. 5+
**20 март "Музейға ололарса ҡараш"**, йәштәр программаһы. 19:00. 16+

*АФАРИН!*

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНАН УҠ...

## ир-егетлеккә һынау тоталар



**Халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, ауыҙ-тел ижадын юғары баһалаған коллектив булараҡ, Баймаҡ ҡалаһының "Айыуҡай" балалар баҡсаһы 2020 йылда "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы тарафынан башланғыс алған "Урал батыр мәктәбе" проектын ғәмәлгә ашырыу эшенә әүҙем ҡушылды.**

Бөтә донъя таң ҡалырлыҡ, аҡыл-фәһем алырлыҡ "Урал батыр" эпосы тыуған ерҙә, яҡшылыҡты данлаусы әҫәр булараҡ билдәле. Башҡорт халҡының бөгөнгө тормошо, донъяға ҡарашы, уйхыялдары, данлы батырҙары тураһында һүҙ барған был эпос буйынса бәйге үткәреү матур йолаға әйләнә бара. Бәйге "Урал батыр мәктәбе" проекты тарафынан әлегәсә балалар баҡсаһы эсендә генә үткәрелеп килһә, быйыл иһә Рәсәйҙә "Ватанды һаҡлаусылар", Башҡортостанда "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү" йылы уңайынан хәрби-патриотик айлыҡ сиктәрендә, Урал батыр тураһында белемде нығытыу, үҫеп килгән быуында туған телгә һөйөү, милли рух, илһөйәрлек тәрбиәләү маҡсатында район кимәлендә ойошторолдо. Сара Баймаҡ ҡалаһының "Айыуҡай" балалар баҡсаһында уҙҙы. Бәйгелә ҡала һәм район балалар баҡсаһынан дәртле, рухлы, ҡыйыу малайҙар көс һынашты.

Конкурста ҡатнашыусылар үҙ-үҙен менән таныштырыу конкурсында ырыуы, ғаиләһе, шәжәрәһе менән таныштырһа, ижади һәләттәр конкурсында бойондороҡһоҙ жюри һәм тамашасы хөкөмөнә йыр-бейеүҙәрен сығарҙы. Бәйгенең өсөнсө шарты булған интеллектуаль турҙа батырҙар зирәклектә ярышты. Физик көс талап иткән ярыштар ҙа булды бәйгелә. Бында батырҙар Урал батыр кеүек көслө булыуҙарын иҫбатланы. "Таш ташлау" ярышында алыҫ арага метбол тубын ташланылар, мәргәнлектә лә үҙ-ара көс һынаштылар, "Таяҡ тартыш" ярышында сәмләнеп һәр кем көслө булыуын иҫбатланы.

Һөҙөмтәлә 3-сө дәрәжә дипломы менән Тотманов Нурислам ("Йондоҙло" балалар баҡсаһы), 2-се дәрәжә дипломы менән Сәйетҡолов Мираҫ ("Күбәләк" балалар баҡсаһы), 1-се дәрәжә дипломы менән Ишембәтов Искәндәр ("Әкиәт" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре) бүләкләнһә, "Сәсән батыр" номинацияһында Аҫылғужин Инсаф (Иҫке Сибай ауылының "Сулпалар" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе), "Рухлы батыр" номинацияһында Иҫәндәүләтов Эмир ("Толпар" балалар баҡсаһы), "Зирәк батыр" номинацияһында Мөхәрләмов Илсаф (Баймаҡ ҡалаһының 5-се мәктәбенең мәктәпкәсә белем биреү төркөмө) тәбрикләнде, ә "Айыуҡай" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Рахманғолов Данис иң рухлы, иң дәртле, иң көслө тип танылды һәм бәйгенең "Урал батыр - 2025" титулына лайыҡ булды. Һәр ҡатнашыусы конкурстың дипломы һәм "Айыуҡай" балалар баҡсаһынан иҫтәлеккә "Урал батыр" әкиәте китабы менән бүләкләнде.

Был "Урал батыр" батырҙар бәйгеһен йыл да үткәрергә ниәт бар. Бәйге киләсәк быуында милли рух, илһөйәрлек, халҡыбыҙҙың данлы тарихына, йолаларына һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам тәрбиәләү, милли уйын төрҙәрен таратыу маҡсатында уҙғарыла. Сөнки егет кеше батыр ҙа, ҡыйыу ҙа, тәүәккәл дә булырға тейеш. Тап малайҙарҙа - буласаҡ ил һаҡсыларында бөгөн ошо сифаттарҙы тәрбиәләү мөһим!

**Г. НОҒОМАНОВА,**
**Баймаҡ ҡалаһы "Айыуҡай" балалар баҡсаһы өлкән тәрбиәсеһе.**

*ШӘП ЯҢЫЛЫҠ!*

# БАШҠОРТ АТЫНА - ГИМН!



**Башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү институтында башҡорт аты гимны һайланды. Конкурс еңеүсеһе итеп бер тауыштан "Атайсал" ир-егеттәр ансамбле башҡарған "Йәшәһен башҡорт аты" йыры билдәләнде. Йырҙың һүҙҙәрен билдәле шағирә Фирүзә Абдуллина, көйөн Рәмил Туйсин яҙған.**

"Ярты йыл самаһы барҙы был ярыш. Мин башҡорт атына мәҙхиә, уны данлау маҡсатында йыр яҙҙым. Әммә конкурс республика кимәлендә күтәрелеп, гимн булдырыу хаҡында ҡарар ителде. Әйткәндәй, башҡорт атының гимны күптән бар, уның хаҡында бик күп халыҡ йырҙары яҙылған, уларҙа аттарҙың үткәне лә, яуҙағы даны ла сағыла. Хәҙерге күҙлектән ҡарағанда, башҡорт аты гимны айырыуса әһәмиәтле, сөнки был уның брендын популярлаштырырға ярҙам итәсәк. Йылҡы өйөрө һымаҡ, был гимн мотлаҡ күмәк кеше башҡарыуында йырланырға тейеш. Думбыра сыңы аттар сабышын яңғырата, ҡурай һәм ҡумыҙ моңдары уның яу юлын күҙ алдына баҫтыра. Маҡсатыма ирешкәнмендер, тип уйлайым. Башҡорт атының гимнын яҙыу минең өсөн иң ҙур еңеү. Был тарихи мәл", - тип белдерҙе гимн авторы Рәмил Туйсин.

"Башҡорт аты" башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү институты директоры Руслан Ғизәтуллин гимн булдырыу идеяһы менән Баймаҡ районы фермеры Илнур Биктимеров сығыш яһауы хаҡында белдерҙе.

"Башҡорт аты - Башҡортостан Республикаһының тере милли символы. Баймаҡ районынан фермер Илнур Биктимеров башҡорт аты тураһында гимн булдырыу идеяһын тәҡдим итте, беҙ уны хупланыҡ, положение төҙөнөк, профессиональ жюри ағзаларын йыйҙыҡ, комиссия ултырышын ойоштorҙоҡ. Күптән түгел БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тарафынан Башҡортостандың Милли мираҫ дәүләт реестры булдырылды. Ә унда башҡорт аты беренсе урында тора, был бик мөһим ваҡиға. Шуға күрә гимн, һис шикһеҙ, кәрәк. Еңеүсене ҡотлайбыҙ, йыр ысын мәғәнәһендә башҡорт аты гимны булырға лайыҡлы", - тине Руслан Ғизәтуллин.

- Был шиғыр 2023 йылда "Башҡорт аты" фестиваленә арнап яҙылғайны. Көйөн Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Туйсин яҙҙы. Әммә тиҙ арала йырға башҡарыусы табылманы. Гимнға конкурс иғлан ителгәс, Рәмил Туйсин "Атайсал" төркөмө ойоштороп, йырҙы халыҡ хөкөмөнә сығарҙы, - тине Фирүзә Абдуллина.

Хәбәр итеүебеҙсә, "Башҡорт аты гимны" конкурсы "Башҡорт аты" башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү институты, Башҡортостандың Туризмды үҫтереү үҙәге, Йылҡысылыҡты үҫтереү ассоциацияһы һәм "Кыпсаҡ" крәҫтиән-фермер хужалығы тарафынан ойошторолдо. Унда Башҡортостандан, шулай уҡ Татарстандан, Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән, Тула һәм Мәскәү ҡалаларынан 150-нән ашыу кеше ҡатнашҡан. Гимнды баһалама комиссияһы составында билдәле композитор, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Нур Дауытов, Башҡортостан гимны авторы, Башҡортостандың халыҡ артисы Фәрит Иҙрисов, Өфө сәнғәт училищеһының вокал бүлеге мөдире Римма Садиҡова, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Салауат Кирәев һәм композитор Айрат Ғайсин һайланы.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бөхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘҘӘПЛЕЛЕК БИЛГЕҺЕ...

## эйелеп сәләм биргәне

Бер генә кешене аңларға тырышҡансы, дөйөм кешелекте аңларға тырышырға кәрәк.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Иң тәүҙә үҙ-үҙеңә тоғро бул - башҡаларға тоғролоҡ ошонан башлана.

**(Вильям Шекспир).**

Ғүмер ҡыҫҡа, сәнғәт юлы оҙон, уңайлы осраҡ тиҙ үтеп китеүсән, тәжрибә алдаҡсыҡ, фекер ебен табыу еңел түгел. Шуның өсөн ауырыуҙы дауалауҙа врач үҙе генә түгел, ауырыу үҙе лә, әйләнә-тирәләгеләр ҙә, барлыҡ тышҡы хәл-ваҡиғалар ҙа врачтың эшмәкәрлегенә ярҙам итергә тейеш.

**(Гиппократ).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡуян ағастан-ағасҡа бик етеҙ һикереүсе тейенде осрата ла, һорай ҡуя:**

**- Бер нисек тә аңламайым - һин ҡошмо, йәнлекме?**

**- Ҡош та, йәнлек тә, бер аҙ ғына балыҡ та мин, - тип ғорурланып яуап бирә тейен. - Сөнки мин йәнлектәр ҙә, ҡоштар ҙа, балыҡтар ҙа эшләгәнден барыһын да эшләй беләм: осам, йүгерәм, йөҙәм. Ә һин үҙең ни эшләй беләһең?**

**- Мин йүгерә генә беләм шул... - тип күңелһеҙ генә яуаплаған ҡуян.**

**- Нисек инде, башҡа бер ни ҙә эшләй белмәйһеңме ни? - тип аптырап һораған тейен.**

**- Белмәйем шул, - тигән ҡуян оялып ҡына. Шунан дауам иткән: - Ә һин миңә йүгереп күрһәтмәҫһеңме?**

**- Ҡара һуң! - тигән тейен һәм үләндә алпан-толпан атлап маташҡан.**

**- Ә һин нисек осаһың? - тип ҡыҙыҡһынған бер ҡатлы ҡуян.**

**- Ҡара һуң! - тип, тейен бер ҡыуаҡлыҡтан икенсеһенә һикергән һәм ҡолап төшкән.**

**- Бәлки һин миңә нисек йөҙөүеңде һәм ағас буйлап үрмәләүеңде лә күрһәтерһең?- тигән ҡуян.**

**- Рәхим ит! - тигән тейен һәм йылғаға төшөп, ҡойроғо менән һелтәнергә тотонған. Ләкин йылға тулҡыны уны шунда уҡ ярға ырғытҡан. Шунан тейен ағас буйлап үрмәләргә маташҡан, ләкин уның да тәүге ботағына тиклем генә барып еткән.**

**- Шунан, һин барыһын да күрҙеңме инде? - тигән бик тәкәббер генә итеп тейен.- Мин ҡош та, кейек тә, балыҡ та! Ә һин, бахырҡай, йүгерә генә беләһең...**

**Шулай тигән дә тейен, башын ғорур күтәреп, ҡуян янынан китеп барған. Ҡуян яңғыҙы тороп ҡалғас, шулай уйлаған: "Күп эш белеп, уны насар башҡарыуға ҡарағанда, бер генә эште белеп, уны һәйбәт башҡарыу яҡшыраҡ түгелме икән?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
13 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 492